✓ *Иртән өйөңдән сыҡҡан һайын эйәгеңде күтәр, башыңды юғары тот, үпкәләреңдә саф һауа менән тултыр, ҡояш нурҙарына йылмайып баҡ һәм ихлас итеп һәр осраған кешенең ҡулдарын ҡыҫ. Дошмандарың йә башҡа күңелһеҙ нәмәләр тураһындағы уйға бер генә минут ваҡыт ҡалдырма. Дөрөҫ уйлау - ул ижад итеү, ул үҙ баһаңды белеү, ул сәләмәтлегеңдә һаҡлау.*

*Генри Форд.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№29 (499)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ялың матур үтер...**

хәүефһеҙлек хаҡында онотмаһаң



6

**Әхмәт Ураллының балалары...**

туғандарын эҙләп килгән Уралға



7

**Кешегә бөгөн яһалма моң түгел...**



8-9 ҡурай моңо кеүек тәбиғи энергия сығанағы кәрәк

**Фани ғүмеребеҙ...**

диңгеҙҙәге бер тамсы ғына



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ураҙа тотаһығыҙмы, ураҙа мәлендәге фарыҙ ғәмәлдәрҙе беләһегеҙме һәм үтәйһегеҙме?



*Миңзилә ВӘЛИУЛЛИНА, эшҡыуар:* Ураҙа тураһында бөләкәй саҡтан беләм. Өләсәйем дини кеше булды. Биш ваҡыт намаҙын ҡалдырманы, ураҙа тотто. Беҙгә лә аяттар өйрәтә торғайны. Рамаҙан айы мәлендә беҙ, бәләкәй балалар, уның менән бергә ауыҙ асыу мәлен көтөп ала торғайныҡ. Әммә ләкин ураҙаның мәғәнәһен, Рамаҙан айының мосолмандар тормошондағы әһәмиәтен олоғая төшкәс кенә аңлай башланым. Үҙ эшемдә асып, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлағас, хәләл ефетемдән һәм үҙемдән тыуған яҡтарҙа мәсеттәр төҙөүгә күп көс һалдыҡ. Аллаһы Тәғәлә һәр кемгә вазифа йөкмәтә. Ваҡыты еткәс, шул вазифаны үтәйһең. 2006 йылда хәләл ефетем менән хаж ҡылып ҡайтҡандан һуң, дингә тағы ла ныҒыраҡ ылығып киттек. Намаҙ уҡый, ураҙа тота башланыҡ. Шул мәлдән бирле, Аллаға шөкөр, Рамаҙан айындағы ураҙаны ҡалдырмайбыҙ.

Бар эштәрҙе ҡалдырып, тулыһынса дингә бирелеп китеү ҙә артыҡ дөрөҫ түгел. Фани донъя менән генә булып, мәңгелек донъя тураһында онотоу ҙа оло хата. Шуға ла тормошта дин менән донъяуи эштәрҙе йәнәш алып барырға кәрәк. Рухи яҡтан да көслө булыу кәрәк, матди яҡтан да кемдәндер бойондороҡло булмауың яҡшы. Роберт Юлдашев телевизорҙан бер сығышында шундай хәл тураһында һөйләне. Сит илдә булғанында бер монахтың кәмәһенә ултырып, йылға аша йөҙөп сығырға тура килә уға. Монахтың кәмәһенең бер яртыһында - "Уҡырға, ғибәҙәт ҡылырға", икенсе ярытһында "Эшләргә" тигән яҙыу күргәс, ҡурайсы был яҙыуҙарҙың нимәне аңлатыуы тураһында һорай. Монах тәүҙә ишкәге менән "Уҡырға, ғибәҙәт ҡылырға" тип яҙылған яҡты ғына ишеп күрһәтә. Кәмә алға йөҙмәй. Шунан ул "Эшләргә" тип яҙылған яҡтың ғына ишкәген ишеп ҡарай, кәмә шулай уҡ урынынан ҡуҙғалмай. Ике яҡтың ишкәген бер юлы ишә башлағас ҡына кәмә алға йөҙөп китә. Ошо миҫал менән монах дин кешеһенең тормошҡа мөнәсәбәте нисек булырға тейешлегенә ишара яһай. Ғибәҙәт ҡылып, мәсеттәрҙә генә ултырырға ла ярамай, шулай уҡ донъя малы артынан ҡыуып, динде онотоу ҙа ҙур гонаһ. Ислам бар ошо нескәлектәрҙе иҫәпкә алыусы дин. Аҙыҡтан көн дауамында тыйылып тороуҙы - ураҙаны ла йылына бер тапҡыр ғына тәғәйенләй.

Рамаҙан һәр эшендә, һәр һүҙеңдә ныҡлап уйлап тормошҡа ашырырға өйрәтә. Эштә, көндәлек тормошта төрлө хәлдәр сығып тора. Кемдәрҙер ғәйбәттән, кеше менән булышыуҙан бушамай. Ул ғәйбәттәр һинең адресыңа йүнәлтелһә лә, үҙеңдә ҡолаҡ алырға тейешһең. Аллаһы Тәғәлә ошо кеше аша һиңә түҙемлек бирә. Түҙемлек ун һигеҙ сәғәттән ашыу ваҡытҡа ашау-эсеүҙән тыйылыуыбыҙҙа ла күренәсәк. Сөнки ураҙа тотоу менән бергә, донъяуи эштәрҙе лә алып барырға кәрәк буласаҡ бит.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

**Сибай ҡалаһының "Кара аждаһа" көнсығыш һуғыш төрҙәре клубы тәрбиәләнеүселәре Рәсәй һәм донъя кимәлендә үткәрелгән ярыштарҙа ҡатнашып, үҙҙәрен тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтә. Билдәле йәш ушу спортсылары Тимур Кәримов, Иҙел Ураҙгилдин, Карина Хәйбуллина, Артур Ишмырҙин - тап шундайҙар иҫәбендә. Бөгөн беҙ һеҙҙе башҡорт спортының киләсәге - йәш егет Артур ИШМЫРҘИН менән таныштырмаҡсыбыҙ.**

# АЛТЫ ДОНЪЯ КУБОГЫ...

## Артур Ишмырҙиндыҡы



Артур быйыл ҡаланың 8-се һанлы мәктәбенең 9-сы синыфын тамамланы. Көнсығыш көрәше менән 7 йәштән шөғөлләнә. Тренеры Батыр ағай Йәндәүләтов әйтеүенсә, Артур ушуға балалар йортонда тәрбиәләнгән ваҡыттан уҡ ғашиҡ. Эйе, егеткә ата-әсә назынан мәхрүм булыу һынауын да үтергә тура килгән. Батыр ағай әйтеүенсә, биш йәштәр самаһында Артурҙы һәм уның ҡустыһын Мөнирә менән Хәйҙәр Еремеевтар ғаиләһе уллыҡҡа ала. Артурҙың Сибайҙағы иң билдәле клубҡа йөрөй башлауында һәм уның яңынан-яңы үрҙәргә талпыныуында тап ошо ғаиләнең өлөшө баһалап бөткөһеҙ.

Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Артур Ишмырҙин инде күп кенә ҙур ярыштарҙа ҡатнашып, еңеүҙәр яулаған. Мәҫәлән, 2011 йылдың сентябрь урталарында ул Лос-Анджелес (АҠШ) ҡалаһында Бөтә донъя ушу федерацияһының 30 йыллығына арналған ярыштарҙа ҡатнашып, ушу-таолу (күргәҙмә элементтар комплексы) төрө буйынса беренсе урын яулаған. Был ҙур еңеүенән һуң йәш батыр Аргентинаның Мендоза ҡалаһында үткән ушу буйынса XIII Донъя кубогына юллана һәм бында айырыуса ҙур оҫталыҡ менән ушуның алты төрөнән беренсе урын яулай. Айырлыҡ буйынса үҙенән күпкә ауырыраҡ Аргентина егете менән саңда көрәшендә көс һынашып, катана ҡылысы, ике ҡоралды сынйыр менән тоташтырыуҙан барлыҡҡа килгән нунчаки, ҡолау менән дәғүәсегә һөжүм итеү алымдарынан торған дитанцуань, бөркөт стиле, өс быуынлы ҡорал алымдары оҫталығы - саньцзегунь буйынса сығыш яһап, донъяның төрлө мөйөштәренән йыйылған йөҙгә яҡын спортсының танауына сирттә.

(Дауамы 4-се биттә).

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# СЕБЕРҘӘГЕ ЯҠТАШТАРҒА...

## башҡорт балы ташыйым



**Хозур тәбиғәтле, күркәм кешеләр йәшәгән Бөрйән яҡтарында тыуып үҫтем. Ләкин тормош елдәре алыҫ Себергә илтте һәм бына оҙаҡ йылдар ошо яҡтарҙа ғүмер итәм. Тәбиғәттең һәр миҙгеле матур, тик минең өсөн йәй айырыуса яҡын, сөнки нәҡ ошо ваҡытта тыуған яҡтарыма ҡайтып ял итәм. Йәйге ял көс, дәрт, дарман бүләк итә һәм шулай уҡ ғаиләмә өҫтәмә килем килтерергә лә булышлыҡ итә.**

Данлыҡлы башҡорт балы бар ҡитғаларҙа билдәле. Уның сихәтле һәм файҙалы көсөн, телде йоторлоҡ тәмен белмәгән-ишетмәгән кеше юҡтыр. Мин йәшәгән Мегион ҡалаһында ла тылсымлы башҡорт балын алырға теләүселәр бихисап. Улар алдан уҡ миңә балға заказ бирә һәм йәйге ялымдан машинаға һыйған тиклем бал тейәп киләм. Мегионға ҡайтҡан көндә үк күбеһе килеп балды алып та бөтә. Шулай итеп, улар тәмле ашамлыҡҡа, ә мин өҫтәмә аҡсаға эйә булам. Таныштарым да шат, минең дә күңел көр. Мәҫәлән, Бөрйәндә балдың 3 литрын 1500 һумға һатып алып була. Күмәртәләп алғанда тағы ла осһоҙораҡ хаҡҡа төшә. Ә Мегионда иһә шул уҡ өс литрҙы (балдың төрөнә ҡарап) 2000-3000 һумға һатам. Айырма кеҫәлә ятып ҡала. Минең сифатлы, экологик яҡтан таҙа ерҙә йыйылған, хуш еҫле балды ғына алып килеүем барыһына ла билдәле, шуға күрә оҙаҡ йылдар эсендә үҙемдең даими һатып алыусыларым барлыҡҡа килде.

Башҡортостанда тыуып үҫеп, Себер яҡтарында йәшәүселәр бихисап. Ситтә күпме ғүмер кисерһәң дә, иманым камил, тыуған яҡтар тураһындағы күңел түрендәге яҡты хистәрҙе бер нәмә лә алыштыра алмай. Ә Башҡортостандан килтерелгән, тыуған ерҙең тәмен, еҫен, матурлығын, гүзәллеген татырға мөмкинлек биргән әйберҙәр, аш-һыу бер аҙға булһа ла һағыныу хисен баҫырға ярҙам итә. Шуға күрә лә, минеңсә, башҡорт балын һатып алыусылар күп. Улар һалҡын, ыжғыр буранлы кистәрҙә бал менән бер ултырып сәй эсеүҙең оло бәхет икәнлеген яҡшы аңлай.

Минең миҫалым Себерҙә йәки башҡа ерҙәрҙә йәшәүсе милләттәштәремә бер аҙ булһа ла аҡса эшләүгә этәргес булыр, тип ышанам. Бал ғына түгел, май, ҡорот, төрлө үләндәр алып барып һатыу ҙа файҙалы, минеңсә, сөнки барыһы ла Башҡортостанға ҡайтыу мөмкинлегенә эйә түгел бит.

**Фуат ХӨСНЕТДИНОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ураҙа тотаһығыҙмы, ураҙа мәлендәге фарыз ғәмәлдәрҙе беләһегеҙме һәм үтәйһегеҙме?



**(Башы 1-се биттә).**

***Айнур АРЫҪЛАНОВ, Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының йәштәр бүлеге рәйесе:*** Рамаҙан айы - көтөп алған байрамыбыҙ ул. Был айҙа беҙ сабырлыҡҡа һынау үтәбеҙ, төрлө насар һүҙҙәрҙән, ҡылыҡтарҙан арынабыҙ. Аллаһы Тәғәләгә тоғролоғобоҙҙо раҫлап, хәләл ризыҡтарҙан да тыйылып торабыҙ. Ҡудси хәҙистә әйтелә: "Намаҙҙы кеше үҙе өсөн уҡый, ә ураҙаны Аллаһы Тәғәлә өсөн генә тота". Ураҙа мәлендә кешенең шым йөрөүе, өндәшмәүе зекер булып яҙыла.

Быйыл Рамаҙан айының шулай эҫерәк, көндәре оҙонораҡ булған мәлгә тап килеүе беҙҙең өсөн оло һынау ул. Иманыбыҙҙы тап ошо һынауҙы лайыҡлы үтеп раҫлайбыҙ ҙа инде. Тота башлаһаң, ураҙа ауыр түгел. Нәфсе генә тәүҙә, тота алырһыңмы, хәлеңдән килерме, тигән ҡурҡыу ташлай. Аллаһы Тәғәләгә һыйынғанда, Ул еңеллек, көс бирә. Ошо һынауҙарҙы, шул иҫәптән ураҙаны үткәндән һуң, Аллаһы Тәғәлә һүҙ менән аңлатып булмаған ҡәнәғәтләнеү тойғоһо бирә. Был тойғо ихлас күңелдән ғибәҙәт ҡылған һайын арта ғына бара.

Рамаҙан айы бөтәбеҙ өсөн дә изге ай. Бөтә ғибәҙәттәрегеҙ - үҙегеҙ өсөн, ураҙағыҙ минең өсөн, ти Аллаһы Тәғәлә. Ураҙа өсөн бирелгән сауаптарҙы ла Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белә. Тап ошо айҙа иман көслөләгән, Аллаһы Тәғәләгә булған мөхәббәтебеҙҙе, инаныуыбыҙҙы эштәр аша раҫлайбыҙ. Хәләл аҙыҡтан иртә таңдан ҡара кискә тиклем тыйылып, үҙебеҙҙең Уға тоғролоғобоҙҙо иҫбатлайбыҙ. Тел менән генә әллә күпме тапҡыр "Мин - мөъмин!" тип ҡысҡырырға була. Әммә ғәмәлдәребеҙ һүҙҙәребеҙҙең сағылышы булмаһа, улар шул һүҙҙәр булып ҡына ҡала ла инде.

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы:*** Бәләкәй саҡтан ураҙа тотҡан өләсәйемде күреп үҫтем. Уның менән беҙ ҙә сәхәргә тора торғайныҡ. Бергә сәй эсеп, ашанып инек. Шул мәлдән алып сәхәр ризығы минең өсөн иң тәмлеһе булып хәтеремә уйылып ҡалған. Юғары уҡыу йортонда уҡыған саҡтарҙа иһә, фәнни атеизмды өйрәнергә тура килде. Имтихан бирҙек хатта. Шул ваҡытта, беҙ ни өсөн йәшәйбеҙ, тигән һорауға яуаптар эҙләп, Ислам диненә мөрәжәғәт итә торғайным. Шулай яйлап ҡыҙыҡһыныу, дингә ылығыу, инаныу китте лә инде. Динде күберәк белгән һайын, уны нығыраҡ аңлайһың. Аллаһы Тәғәләнең бер икәненә инаныу үҙе үк күп һорауҙарға яуап бирә. Нимә генә эшләһәк тә, Аллаһы Тәғәләгә һығынырға тейешбеҙ. Эшебеҙҙе Уға тапшырырға тейешбеҙ. Ярҙам Унан ғына буласаҡ. Аллаһы Тәғәлә риза булырҙай эштәрҙе ни тиклем күберәк эшләйбеҙ, үҙебеҙгә лә шул тиклем үк яҡшыраҡ буласаҡ. Ураҙаның шулай эҫе мәлдәргә тап килеүе үҙе бер ниғмәт ул. Сөнки ғибәҙәт ҡылғанда, изге ғәмәлде тормошҡа ашырғанда ни тиклем ҡыйыныраҡ булһа, уның әжер-сауабы ла ҙурыраҡ.

Ураҙа итәғәтлелеккә, нәфсене ауыҙлыҡларға өйрәтә, иманды нығыта. Ата-бабаларыбыҙ ураҙаны көтөп алған. Уның йәйҙең эҫе мәлдәренә, оҙон көндәренә тура килеүе лә уларҙы ҡурҡытмаған. Бесәнен дә эшләгәндәр, ғибәҙәтен дә ҡалдырмағандар. Беҙҙең дә был изге айға мөнәсәбәтебеҙ шулай уҡ булырға тейеш. Аллаһы Тәғәләнән түҙемлек һорарға кәрәк. Ул үтәп сыға алмаҫтай йөктө беҙгә йөкмәтмәй.

***Айгиз САФИН, журналист:*** Аллаға шөкөр, ҡурҡыныс атеизм осорон кисереүгә ҡарамаҫтан, халҡыбыҙҙа изге Рамаҙан айына мөнәсәбәт яҡшы һаҡланған. Бәләкәй саҡтан ошо айҙа күберәк ураҙа тоторға, яҡшы эштәр эшләргә кәрәк икәнен белеп үҫкәнбеҙ. Хатта диндең нимә икәнен ныҡлап белмәгән, намаҙ уҡымаған кешеләр ҙә бер-береһенә эйәреп ураҙа тота, төрлө яманлыҡтарҙан, алдашыуҙан, ғәйбәттән йыраҡ торорға тырыша. Минең дә дингә аяҡ баҫыуым тап Рамаҙан айында ураҙа тотоуҙан башланып киткәйне. Хәҙер ҙә, бөтә мосолмандар кеүек үк, Рамаҙан айын оло тулҡынланыу, өмөттәр менән ҡаршы алам. Рухи яҡтан да, физик яҡтан да таҙарына, үҫә, камиллаша торған ай ул. Был айҙа күберәк Ҡөрьән уҡырға, уйланырға, изге эштәр эшләп ҡалырға тырышырға кәрәк. Рамаҙан айын яҡшы итеп үткәргән мосолмандың йыл буйына йыйылған ғонаһтары ғәфү ителә. Ошо мөмкинлек тураһында һәр кемебеҙ яҡшы итеп уйланһа ине.

Тағы ла шул турала иҫкәртке килә: был айҙа ураҙа тотоу ул ниндәйҙер матур халыҡ йолаһы түгел, ул фарыз ғибәҙәт, йәғни һәр мосолман тарафынан мотлаҡ эшләнергә тейеш эш. Ураҙа тотҡан өсөн - ҙур сауап, тотмаған өсөн ҙур яза ҡаралған. Шуға ла ураҙаға еңел-елпе ҡарарға ярамай. Рамаҙан айында кисерерлек сәбәптәрһеҙ бер көн генә ураҙа тотмаһаң да, аҙаҡ ул көндөң ғәйебен ғүмер буйы ураҙа тотоп та аҡлап булмаясаҡ, тип әйтелә хәҙистәрҙә. Кешеләрҙе был айға Аллаһ алдында яуаплылыҡ тойғоһо, Уның бөтә гонаһтарыбыҙҙы ғәфү итеүенә ҙур өмөт менән аяҡ баҫырға саҡырам.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

● Таныштарығыҙ араһында 2012 йылдың икенсе яртыһына **"Киске Өфө"**гә яҙылмай ҡалғандар булһа, әйтегеҙсе уларға: августың 17-нә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башларҙар. Индекс - 50665, дүрт айға яҙылыу хаҡы - 236 һум 16 тин.

● Шулай уҡ июлдә, августа 2013 йылдың тәүге яртыһына 2012 йыл хаҡтары менән яҙылырға була икәнен дә иҫкәртеп ҡуябыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрә алаһығыҙ. Бүләктәр тураһында хәбәр итербеҙ.

● Июнь айында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән өс уҡыусыбыҙ - Учалы районы Илтабан ауылынан Мәүлиҙә Закирова, Әбйәлил районы Буранғол ауылынан В. Килдейәрова, Ишембай районы Ҡанаҡай ауылынан Гөлсирә Янбаева - башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим", Бөрйән районы Байназар ауылынан Фәнүзә Аҙанғолова, Баймаҡ районы Төркмән ауылынан Роза Рыҫмөхәмәтова, Күгәрсен районы Нуҡай ауылынан Наилә Йәғәфәрова - "400 башҡорт халыҡ йыры", Өфө ҡалаһынан Ғәлимовтар, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Людмила Зиннурова, Учалы ҡалаһынан Рөстәм Нуретдинов Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарына лайыҡ булды.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Владимир Путин Президент булып һайланғандан һуң тәүге тапҡыр үткәрелгән Дәүләт Советы ултырышы эшендә ҡатнашты. РФ Президенты Указы менән Дәүләт Советы Президиумы ултырыштары өс айға бер тапҡыр үткәреләсәк. Уларҙа дәүләт әһәмиәтендәге мәсьәләләр тикшереләсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Һамарҙа дини экстремизмға ҡаршы тороу мәсьәләләренә арналған округ кәңәшмәһендә ҡатнашты. Волга буйы федераль округы төбәктәрендә дини экстремизм күренештәренең сәбәптәре һәм уларға ҡаршы тороу юлдары тикшерелде. Атап әйткәндә, дини хеҙмәткәрҙәрҙе башҡа илдәрҙә әҙерләү практикаһын кәметеү өсөн, Волга буйы федераль округында ошондай белгестәр әҙерләү үҙәктәрен ойоштороу кәрәклеге билдәләнде. Бынан тыш, сит илдәрҙән ағылған, һәр ваҡыт конструктив булмаған идеологияға ҡаршы тороу, йәш быуынға исламдың классик ҡанундарын һеңдереү өсөн йәштәр менән эшләүҙең ни тиклем мөһим икәнлеге билдәләнде.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Республика йортонда Афғанстан Ислам Республикаһы Милли Ассамблеяһының Аҡһаҡалдар ҡоро делегацияһы менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостан Республикаһы менән Афғанстан Ислам Республикаһының төрлө өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек итеү мөмкинлектәре тикшерелде. Аҡһаҡалдар ҡоро рәйесе хеҙмәттәшлек итеүҙең өҫтөнлөклө йүнәлештәрен билдәләне. Ул шулай уҡ Башҡортостан эшҡыуарҙарын Афғанстанда иҡтисади проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашырға, предприятиеларҙы реконструкциялауҙа ярҙам итергә саҡырҙы, шулай уҡ Афғанстан менән Рәсәй араһындағы мәҙәни бәйләнештәрҙең мөһим булыуын билдәләне. Был бәйләнештәрҙе үҫтереү өсөн Мәскәүҙә Афғанстандың мәҙәни үҙәге булдырыла.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов эш сәфәре менән республиканың Федоровка районында булды. Премьер Динес ауылында малсылыҡ фермаларын реконструкциялау барышы менән танышты. Район үҙәгендә "Ҡыңғырау" балалар баҡсаһына капиталь ремонт үткәреү, социаль торлаҡ төҙөү барышы менән танышты. Һәйет ауылы эргәһендә йылға аша күпер асыу ҙа сәфәрҙең мөһим объекттарының береһе булды.

ДОНЪЯ ШАУҠЫМЫ

# БӨТӘ ДОНЪЯ САУҘА ОЙОШМАҺЫНА ИНЕҮ...

## дөрөҫ аҙыммы, яңылышмы?

**Ағымдағы йылдың 10 июлендә Рәсәй Дәүләт Думаһы илдең ВТО-ға инеүе тураһындағы протоколды раҫланы. Тимәк, уставҡа ярашлы, Рәсәй 30 көндән автоматик рәүештә Бөтә донъя сауҙа ойошмаһының тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп таныласаҡ.**




Рәсәйҙең ВТО-ға инеү процесы үҙ эсенә 18 йылды ғына түгел, ә күпкә оҙағыраҡ ваҡытты алды. Сөнки алыҫ 1986 йылда уҡ әле СССР хөкүмәте ошо юҫыҡта тәүге аҙымдарын эшләй, ләкин уңышһыҙлыҡҡа осрай. 1994 йылда инде Рәсәй был мәсьәләгә кире әйләнеп ҡайта һәм, ниһайәт, үҙ маҡсатына өлгәште.

Бөтә донъя сауҙа ойошмаһы үҙ эшен Икенсе бөтә донъя һуғышынан һуңғы йылдарҙа тариф һәм һатыу буйынса Дәүләт килешеүенән башлай. 1980 йылдар уртаһынан 1993 йылға тиклем донъяның төрлө илдәре ошо өлкәлә үҙ-ара һөйләшеүҙәр алып бара. Был һөйләшеүҙәр еңелдән булмай, сөнки улар илдәр араһындағы сауҙа һәм иҡтисади мәсьәләләргә генә түгел, ә башҡа өлкәләргә лә ҡағылып үтә. Мәҫәлән, мәғәнәһеҙ кеүек яңғыраһа ла, ҡайһы бер илдәр хатта теге йәки был илдә йылына нисә теш щеткаһы етештерелергә тейешлеген дә тикшерергә һәм аныҡларға тырыша. Һөҙөмтәлә, 1994 йылда ғына барлыҡ илдәр ҙә бер төрлө фекергә килә һәм тейешле килешеүҙәргә ҡул ҡуйып, үҙенсәлекле коалиция барлыҡҡа килтерә. Ул бөтә донъяла ирекле һатыу итеү, төрлө өлкәлә тауар етештереүсе һәм хеҙмәт күрһәтеүселәргә тигеҙ шарттар булдырыу һәм интеллектуаль милектең тейелгеһеҙлеген билдәләүсе принциптарҙы иғлан итә. ВТО-ның төп вазифалары - сауҙа килешеүҙәренең үтәлешен контролдә тотоу, төрлө илдәр араһында сауҙа килешеүҙәрен ойоштороу, ВТО-ға инеүсе дәүләттәрҙә сауҙа сәйәсәтенең үтәлешен тикшереү һәм ВТО ағзалары араһындағы сауҙа бәхәстәрен көйләү.

Бөтә мәсьәләләр буйынса ла төрлө фекерҙәр һәм дәлилдәр була. Был - ҡағиҙә. Рәсәйҙең ВТО-ға ҡушылыуы ла ошо ҡағиҙәнән ситләшмәне һәм үҙе тирәләй был фекерҙе хуплаусыларҙы һәм кире ҡағыусыларҙы йыйҙы.

Рәсәйҙең ВТО-ға инеүе тик яҡшы һөҙөмтәләр генә килтерәсәк, тигән фекерҙе хуплаусылар үҙ оппоненттарын юҡ урында ғауға ҡуптарыусылар тип атай һәм уларҙы аҡылға килергә саҡыра. ВТО-ға инеү, улар фекеренсә, Рәсәйҙең иҡтисади үҫешен күтәрәсәк, тауарға һәм аҙыҡ-түлеккә хаҡтар төшәсәк, тимәк, тормош кимәле лә үҫәсәк. Шулай уҡ быға тиклем төрлө пошлина, квоталар һәм башҡа төрлө сикләүҙәр менән "ауыҙлыҡланған" Рәсәй компаниялары, эшҡыуарҙары бөтә донъя баҙарына сығыу мөмкинлеге аласаҡ, тип билдәләй улар. Шулай уҡ сит илдәр компанияларының Рәсәй баҙарында иркен эшләү мөмкинлеге аласағын да тик ыңғай баһалайҙар, йәғни конкурентлыҡ үҫкән һайын, сифат та артасаҡ, тигән принциптан сығып һүҙ йөрөтәләр. Ғөмүмән, Рәсәйҙең ВТО-ға инеү буйынса делегацияһы етәксеһе Максим Медведков "Рәсәй ВТО-ға бик тә ҡулайлы һәм уңайлы шарттарҙа ҡушыла", тип ышандыра. Уның белдереүенсә, борсолорға сәбәп юҡ. Мәҫәлән, сит илдән индерелеүсе тауарҙарға пошлина яйлап кәмейәсәк: ауыл хужалығы тауарҙарына ул - 13,2 проценттан 10,8 процентҡа, сәнәғәт тауарҙарына - 9,5-тән 7,3 процентҡа, ағастан һәм ҡағыҙҙан эшләнгән тауарҙарға 13,4-тән 8 процентҡа тиклем кәмейәсәк һәм башҡа өлкәләрҙәге пошлина үҙгәрештәре 2020 йылға тиклем һуҙыласаҡ һәм һиҙелмәйәсәк. Ә был ваҡыт эсендә Рәсәй компаниялары үҙ эшмәкәрлегенә зыян килмәҫлек шарттар булдырып өлгөрәсәк, тип билдәләй эксперттар. Шулай уҡ улар фекеренсә, Рәсәйҙең был аҙымы эшлекле климатты яҡшыртыуға һәм иҡтисадты нефтҡә хаҡтарҙың үҙгәреп тороуынан һаҡлауға ла булышлыҡ итәсәк. Чиновниктар банктарҙы ла хәүефләнмәҫкә саҡыра, сөнки сит ил банктары өсөн илдә әлегә тиклем булған ҡағиҙә үҙ көсөн юғалтмаясаҡ, йәғни улар Рәсәйҙә туранан-тура үҙ бүлектәрен аса алмаясаҡ. Шулай уҡ дөйөм Рәсәй банк секторында сит ил капиталы әйләнеше лә 50 проценттан артмаясаҡ. ВТО-ға ҡушылыуға шикләнеп ҡараусы IT-сектор өсөн дә, хөкүмәт белдереүенсә, был аҙым бары тик яҡшы һөҙөмтәләргә генә килтерәсәк, сөнки Рәсәйгә сит ил тауарын индереү пошлинаһының кәмеүе, был өлкәлә кәрәкле сит ил компоненттарына ла хаҡтарҙың төшөүенә, тимәк, был өлкәләге тауарҙарҙың үҙхаҡы төшөүенә килтерәсәк.

Ә ВТО-ға инеүгә ҡаршы сығыусылар нимәгә баҫым яһай һәм хәүефләнә? Улар фекеренсә, ВТО үҙ ағзаһы булған илдәргә үҙенең дәүләт сәйәсәтен тағырға тырыша, ә был, үҙ сиратында, дәүләттең үҙаллылығын юғалтыуға килтерәсәк. Шулай уҡ ойошма айырым илдәрҙең иҡтисади үҫешенә, тирә-яҡты, һаулыҡты һәм ғүмерҙе һаҡлауға ҡарағанда, коммерция мәнфәғәтен юғары ҡуя, тигән фекерҙе лә ишетергә улар. Ә дәүләт яҡлауына мохтаж аграр секторға иһә ВТО-ға инеү үлем хөкөмө сығарыу менән бер, тип ҡурҡыталар. Ошондай уҡ хәүефле яҙмыш тағы ла бер секторҙы - авиация сәнәғәтен дә урап үтмәйәсәк, ти белдерә улар. Сит ил тауарҙарын Рәсәйгә индереү өсөн таможня түләүҙәренең йомшарыуына ҡыуаныусыларға яуап итеп, улар Рәсәй баҙарының сифатһыҙ тауарҙар менән туласағына ишаралай. Был осраҡта рәсәйлеләр быға тиклем ҡуллана алмаған сит ил тауарҙары һәм хеҙмәттәре менән ҡулланыу мөмкинлеге аласаҡ, ләкин улар сит ил компанияларынан бойондороҡлоға әйләнәсәк. Ә ошондай уҡ тауар етештергән йәки хеҙмәт күрһәткән Рәсәй компаниялары ситтә тороп ҡаласаҡ һәм был, иртәме-һуңмы, уларҙың ябылыуына килтерәсәк, йәғни әлегә үҫеш юлында ғына булған, нығынып етмәгән Рәсәй компаниялары сит илдең аяғында ныҡ баҫып торған компаниялары менән көс һынаша алмаясаҡ, тип белдерә ВТО-ға ҡаршы булыусылар. Рәсәй баҙарының сифатһыҙ, хатта һаулыҡ өсөн хәүефле тауарҙар менән тулыуына ВТО илдәре араһында әйләнештә булған тауарҙар сифатының ҡаты тикшерелмәүе лә булышлыҡ итәсәк, ти ҡайһы бер эксперттар. Әлбиттә, бындай хәүеф "Газпром", "Норильский никель" һәм башҡа ошондай ҙур корпорацияларҙы урап үтәсәк, сөнки улар ВТО территорияһында үҙ операцияларын сикһеҙ рәүештә башҡарыу мөмкинлеге аласаҡ. Ләкин бында ла кире яҡты табыусылар бар. Улар фекеренсә, был осраҡта бары бай олигархтарҙан торған төркөм генә үҙ файҙаһын аласаҡ, ә илгә һәм ябай халыҡҡа бынан бер ниндәй ҙә фәтүә булмаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙең ВТО-ға инеүенә ҡарата булған фекерҙәр ҡапма-ҡаршылығына аптырарға түгел, сөнки һәр яңылыҡ һәм үҙгәреш йәмғиәт тарафынан һаҡ, ә бөгөнгө тотороҡһоҙ заманда иһә хатта хәүеф менән ҡабул ителә. Рәсәй ВТО-ла "үҙ кеше" булып китерме һәм бөтә донъя менән партнерлыҡ яҡшы һөҙөмтәләр килтерерме икәнлеген бары тик ваҡыт ҡына күрһәтәсәк.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Дәүләт Думаһы яҙғы сессияһының һуңғы ултырышы үткән көндә Думаның Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты ағзаһы Сәлиә Мырҙабаеваға Дәүләт Думаһының Почет грамотаһы тапшырылды. Был наградаға депутат "Рәсәй Федерацияһында ҡануниәт һәм парламентаризм үҫешенә тос өлөш индергән өсөн" лайыҡ булды.

✓ Йыл башынан Башҡортостанда 2180 янғын сыҡҡан, уларҙа 169 кеше һәләк булған. Ағымдағы айҙа янғындар һаны яҡынса 15 процентҡа кәмегән. Төбәктә 304 профилактика төркөмө булдырылған, улар тарафынан 137 мендән ашыу шәхси йорт тикшерелгән. Статистика буйынса янғындарҙың күпселеге фатирҙарҙа хужаларҙың иғтибарһыҙлығы арҡаһында сыға. Ғәҙәттә, быға эскән килеш тәмәке тартыу сәбәп була. Ошоға бәйле әүҙем социаль эшмәкәрлек алып барыла. Тәүге ярты йыллыҡта янғындарҙы иҫкәртеүгә арналған 208 телесюжет донъя күргән, радиола 809 сығыш ойошторолған.

✓ "Динозаврик" тип аталған динопарк үткән ял көндәрендә республиканың Әбйәлил районында асылды. Был яңы күңел асыу үҙәге илдә иң ҙурҙарҙан һанала. Паркта боронғо хайуандар һындары күрһәтелә. 28 динозаврҙан тыш, бында дөйә, горилла, жираф, зебра, арыҫлан кеүек хайуандарҙың да моделдәрен күрергә була. Фигуралар экологик яҡтан таҙа материалдарҙан эшләнгән, барлыҡ кәрәкле сертификаттар бар. Шулай уҡ ял итеү үҙәгендә кафе, ресторан, ҡунаҡхана эшләй. Динопарк ҡыш көнө лә эшләйәсәк, бында саңғы һәм конькиҙа шыуыу өсөн трассалар булдырыу планлаштырыла. Шулай уҡ аквапарк төҙөү, парашют спортын үҫтереү күҙ уңында тотола.

✓ Рәсәйҙең Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеүе уңайынан Ауыл хужалығын үҫтереү буйынса дәүләт программаһында ауыл хужалығы етештереүселәренә ярҙам итеүҙең яңы йүнәлештәре билдәләнгән. Улар араһында ауыл хужалығы ерҙәренең ундырышлылығын тергеҙеүгә йүнәлтелгән саралар ҙа бар. Субсидиялар күләмен 1 га майҙанға төрлө параметрҙар буйынса иҫәпләп сығарылған ставка буйынса билдәләйәсәктәр. 2013 йылда был маҡсатҡа 20 млрд һумдан ашыу аҡса йүнәлтеү планлаштырыла, шул иҫәптән федераль бюджеттан - 15,2 млрд, Рәсәй субъекттары бюджеттары средстволарынан 5,3 млрд һум бүленәсәк. Рәсәй ауыл хужалығы министрлығы әле ошо субсидияларҙы биреү механизмы өҫтөндә эшләй.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨЛӘ ЭШЛӘЙҘӘР...

## Мәскәүгә һалым түләйҙәр

**Өфө ҡалаһының бюджеты Рәсәйҙең башҡа ҙур ҡалалары араһында иң бәләкәйе һанала. Былтыр уның күләме 18 миллиард һум тирәһе тәшкил иткән. Миллиондан ашыу кеше йәшәгән ҡалаға иһә йылына кәмендә 24 миллиард һумлыҡ бюджет талап ителә.**

Баш ҡала ҡаҙнаһының сағыштырмаса бәләкәй булыуы бер нисә сәбәпкә бәйле. Быйылдан республика һәм ҡала округы араһындағы сығым вәкәләттәре яңынан ҡаралды, бюджет-ара мөнәсәбәттәр үҙгәртелде. Әйтәйек, һаулыҡ һаҡлау системаһы тулыһынса төбәк ҡарамағына күсеү арҡаһында ҡала бюджетынан медицина тармағына аҡса бүленмәй. Шулай уҡ хәҙер хоҡуҡ һаҡлау органдары федераль бюджеттан финанслана. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Илгиз Насретдинов әйтеүенсә, киләһе йылда урындағы ҡаҙнаға 24-25 миллиард һум йәлеп итеү маҡсаты ҡуйылған. Ошо йәһәттән ҡала етәкселеге бюджет-ара мөнәсәбәттәрҙе яңынан үҙгәртеү тәҡдиме менән республика Президентына сығырға ниәтләй.

-Бынан тыш, һалым һалыу системаһына ла үҙгәрештәр индереүҙе һораясаҡбыҙ. Эшҡыуарҙар үҙ килеменең 5 процентын ҡала бюджетына биреп торһа, урындағы ҡаҙнаға ҙур ярҙам буласаҡ. Бындай һалым башҡа ҡалаларҙа бар. Ғөмүмән, предприятиеларҙың эшмәкәрлегенә бәйле һалымдарҙы күтәреү яғындабыҙ. Әйтәйек, башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда, Өфөлә ҡуртым өсөн түләү бик арзан.

Бөгөн бюджет килеме тәү сиратта муниципаль милек, ер участкалары һатыуҙан килә. Әле был беҙҙең өсөн ҡулай, әммә киләсәктә килемдәрҙең ҡырҡа кәмеүе ихтимал, сөнки ҡуртым өсөн түләү кәмейәсәк, ти И. Насретдинов. Был йәһәттән милекте, ерҙе һатыуға ҡарағанда, уларҙы ҡуртымға ғына биреүе отошлораҡ. Һалым күләме предприятиеларҙың теркәлеү урынына ла бәйле. "БашТЭК" предприятиеһы республикала филиал ғына булып ҡалғас, унан алынған һалым күләме һиҙелерлек кәмене. "IKEA", "Матрица" кеүек эре сауҙа нөктәләре лә Мәскәүҙә теркәлгән. Тимәк, төп һалым килеме лә шунда китә. Республика Президенты һуңғы сығыштарының береһендә, эшҡыуарҙар беҙҙең төбәктә эш аса икән, төп һалымды ла беҙгә түләргә тейеш, тигәйне. Әммә эшҡыуарҙарҙы быға мәжбүр итеү мөмкин түгел. Үҙ-ара килешеүҙәр һөҙөмтәһендә генә был маҡсатҡа өлгәшеп була, тигән ҡараште Илгиз Диҡҡәт улы.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**1 июлгә ҡарата ҡала округы бюджетына барлығы 4 миллиард 382 миллион һум йәлеп ителгән. Үткән йыл менән сағыштырғанда, был 220 миллионға кәмерәк. Ҡала бюджеты сығымдары тәү сиратта мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәләренә һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа китә. Быйыл юлдарҙы төҙөкләндереү өсөн сығымдар ике тапҡырға артты һәм бер миллиард һум тәшкил итте, ти И. Насретдинов. Аҡса нигеҙҙә урамдарҙы киңәйтеүгә, Өфө аэропорты биләмәһенә, Салауат Юлаев проспектына яңы асфальт ҡатламын һалыуға китә. Бынан тыш, яңы Дим юлын төҙөүгә 900 миллион һум бүленгән. Бюджет учреждениеларына аҡса хәҙер субсидия рәүешендә бирелә. Йәғни сығымдарҙы учреждение үҙе планлаштыра ала. "Сығымдар хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡын күтәреүгә лә китһен, тигән маҡсаттан бындай алымды һайланыҡ", ти Илгиз Диҡҡәт улы.**

АФАРИН!

# АЛТЫ ДОНЪЯ КУБОГЫ...

## Артур Ишмырҙиндыҡы



(Башы 1-се биттә).

- "Фәрештәләр ҡалаһы", йәғни Лос-Анджелес миндә ҡабатланмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы, - ти ушу оҫтаһы Артур. - Тәү сиратта мине кешеләр һоҡландырҙы. Лос-Анджелеста бары тик бәхетле, шат һәм изге күңелле кешеләр генә йәшәгәндәй тойолдо. Кемгә генә ярҙам һорап мөрәжәғәт итһәк тә, һәр кем ихлас ярҙам итте. Барыһының да йылмайып йөрөүе аптыратты. Уларға йылмая торғас, үҙемдең дә ауыҙым талып бөттө. Рәсәйҙә был бик һирәк осрай торған күренеш бит. "Америкала йәшәүе күңеллелер, моғайын" тигән һығымтаға килгәйнем шул саҡта...

Аргентина тураһында ла йылы хәтирәләре менән уртаҡлашты Артур. Мендоза ҡалаһындағы иң тәүге сығышында уҡ Аргентина егете менән көрәшә. "Тулҡынланыу тойғоһон нисек еңдең?" тигән һорауға ул шулай тине:

- Көндәлек дүрт сәғәтлек күнекмәләрҙән һуң үҙемде иркен тоторға, тулҡынланмаҫҡа өйрәндем. Тренерҙарым - Батыр һәм Тимур ағайҙарымдың кәңәш-дәртләндереүҙәре лә ныҡ ярҙам итә бындай саҡтарҙа. Уларҙың рухи терәген тойоуым арҡаһында ҡыйынлыҡтар ҙа еңел үтелгәндәй тойола. Әлбиттә, үҙеңдең дә ныҡ булыуың кәрәк. Ә был ныҡлыҡҡа мин тренерҙарымдан өйрәнәм.

Алты донъя кубогы эйәһе артабан күнекмәләре тәртибе, көндәлек режимы менән таныштырҙы. Күнекмәләре - йүгереү, кирелеп-һығылыу, скакалка менән һикереү, парлашып, йөҙгә-йөҙ тороп төртөшөүҙән ғибәрәт икән. "Кеше ни теләй, шуға өлгәшә ала. Тиҫтерҙәрем, нindәй ҙә булһа һөнәргә өйрәнергә ашығығыҙ", - тине ушу батыры һәм үҙенең ушу менән шөғөлләнеүенең күҙгә күренеп торған файҙалы яғын атаны: "Беҙ, ҡара аждаһалылар, бер ваҡытта ла урамда бушты юҡҡа ауҙарып йөрөмәйбеҙ. Шулай булғас, төрлө сетерекле хәлдәргә лә әләккәнем юҡ. Икенсенән, ҡала бәләкәй генә булғас, барыһы ла тиерлек беҙҙе урамда танып бөткән, бәлки, шуғалыр ҙа бәрәү ҙә беҙҙең менән конфликтҡа инергә ашыҡмай. Беҙгә урамда һуғышырға ярамай, хулигандар ҙа беҙҙең тирәгә яҡын да юламай..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай Артур Ишмырҙин кеүек егеттәргә күҙ терәп тора беҙҙең Башҡортостан һәм Рәсәй спорты. Яҡын киләсәктә Артур үҙен муай-тай көрәше буйынса һынап ҡарарға самалай. Тиҙҙән Өфөлә үтәсәк муай-тай (тай боксы) буйынса бөтә Рәсәй "Салауат Юлаев" кубогында ла ҡатнашырға уйы бар егеттең. Хәйер, ниндәй генә ярыш булһа ла, был ярышҡа индереүҙәре, ҡатнаштырыуҙары ғына шарт, йәш чемпион өсөн ярыштар ҡурҡыныс түгел: ул һынауҙарға бирешмәй торғандарҙан.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

# ЭҪЕ КӨНДӘР...

## йылғаларҙы һайыҡтырҙы

**Башҡортостанға ғәҙәттән тыш эҫе көндәр килде. Бындай йәйге селлә беҙҙең төбәккә хас түгел, әммә һуңғы йылдарҙа юғары температураның оҙаҡҡа урынлашыуы бик йыш күҙәтелә. Быйыл да эҫе һауа торошо халыҡты борсоуға һала. Сөнки әлегә ямғырҙар ҙа ҡыуандырмай. Яуып торһа ла, һирәк һәм ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына ҡоя. Ауыл хужалыҡтары уңыш, мал аҙығы уңмауы өсөн борсолһа, ҡалалағылар нигеҙҙә эсәр һыу хаҡында уйлай.**

Эҫе көндәр арҡаһында йылғалар һайыҡҡандан-һайыға бара. Шул иҫәптән Өфө ҡалаһы тирәһендә лә Ағиҙел һәм Ҡариҙел һыуы кәмеүгә китте. Бөгөн Ағиҙелдең тәрәнлеге ике метр ҙа тәшкил итмәй. Ошо сәбәпле Өфө халҡы араһында, эсәр һыуға бәйле ғәҙәттән тыш хәл тыуып ҡуйыуы ихтимал, тигән имеш-мимештәр ҙә тарала башланы. Метеорологтар һәм экологтар һыу ҡулланыуға бәйле иҫкәртеүҙәр, мөмкин була торған ҡыйынлыҡтар хаҡында әйтте лә инде. Хәлгә асыҡлыҡ индереп, "Уфаводоканал" предприятиеһы етәксеһе Вячеслав Гордиенко, ҡаланы һыу менән тәьмин итеү ғәҙәти эш режимында бара, борсолоуҙарға урын юҡ, тине.

- Ысынлап та, уҙған йылға ҡарағанда быйыл йылға үҙәне тиҙерәк тарая. Бөгөнгө һыу кимәле былтыр август айында ғына күҙәтелә ине. Павлов һыу һаҡлағысының кимәле аҙнаһына 30 сантиметрға түбәнәйә. Әммә был ғәҙәттән тыш хәл түгел. Бөтә һыу алыу ҡоролмалары тулы ҡеүәт менән эшләй.

В. Гордиенко әйтеүенсә, иң ауыр мәл 2010 йылда булды. 250 һыу алыу ҡоролмаһының йөҙгә яҡыны түбән ҡеүәт менән эшләүгә күсерелгәйне. Ҡоролоҡ арҡаһында һыуҙың кәмеүе йәй түгел, ә көҙ мәлендә һыу ебәреү эшмәкәрлегенә ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Шуға ҡарамаҫтан, өфөләләр ул йылда һыу ҡулланыу йәһәтенән ҡыйынлыҡтар кисермәне. "Быйыл да һыу кәмеүҙең эҙемтәһе тап октябрь-декабрь айҙарында күҙәтеләсәк. Әммә беҙ быға әҙербеҙ", - ти В. Гордиенко.

Әлеге көндә "Уфаводоканал" предприятиеһы тарафынан һыу алыу ҡоролмаларында һыу күләмен арттырыу, һыуҙың сифатын яҡшыртыу маҡсатында Ҡариҙел йылғаһының үҙән ҡатламдарын йомшартыу эштәре башҡарыла. Был һыуҙың тәбиғи таҙарыуына, ниндәйҙер күләмдә йомшарыуына булышлыҡ итәсәк, ти белгестәр.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**2010 йылда һыу ебәреү күләме тәүлегенә 400 кубометр тәшкил итһә, быйыл ул күрһәткес 385-кә төштө. Был һыу кәмеүгә түгел, ә һыуҙы экономиялауға бәйле. Бөгөн республика программаһы буйынса Ҡариҙел йылғаһында тағы бер һыуһаҡлағыс төҙөү проекты әҙерләнә. Ул да Өфөнө һыу менән тәьмин итеп торасаҡ, тип көтөлә.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда 377 мең тонна бесән әҙерләнгән. Планға ҡарата был 52 процент. Мал аҙығы әҙерләүселәр траншеяларға 863 мең тоннанан ашыу һутлы мал аҙығы тултырған. Аграр ведомствоның эксперттары әйтеүенсә, аномаль эҫе көндәргә ҡарамаҫтан, быйыл хужалыҡтар үҙен мал аҙығы менән тулыһынса тәьмин итә аласаҡ. Иң насар күҙаллауҙар буйынса ла, республикала уртаса алғанда бер шартлы мал башына 22 центнер мал аҙығы бәрәмеге әҙерләнәсәк. Әле БР Ауыл хужалығы министрлығы Урал аръяғының ҡоролоҡтан зыян күргән райондарына ярҙам итеү варианттарын эҙләй.

✓1-3 августа "Сочи 2014" мәҙәни олимпиадаһының икенсе "Рәсәй төбәктәре марафоны"нда Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә танылыу тапҡан "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле сығыш яһаясаҡ. Был хаҡта "Рәсәй төбәктәре марафоны"ның матбуғат үҙәгенән хәбәр иттеләр. "Мираҫ" илдә генә түгел, Франция, Испания, Италия, Португалия, Болгария, Венгрия һәм башҡа илдәрҙә лә яҡшы таныш. "Рәсәй төбәктәре марафоны" - "Сочи 2014" мәҙәни олимпиадаһы сиктәрендә иғлан ителгән Музыка йылының төп ваҡиғаларының береһе. Илебеҙҙең күп милләтлелеген күрһәтеү сараның төп маҡсаты булып тора. Һәр төбәк исеменән уның үҙенсәлекле мәҙәниәтен һәм традицияларын күрһәткән бер йәки бер нисә коллектив сығыш яһаясаҡ.

✓"Һамар - Өфө - Силәбе" автомобиль магистрале идаралығы ауыр йөк машиналары водителдәренә эҫелә юл йөрөүҙең яңы ҡағиҙәләре индерелеүе хаҡында иҫкәртә. Бында һауа температураһы 32 градустан үткәндә ауыр йөк машиналарына ҡаты япмалы юлдарҙан йөрөүҙең сикләнеүе тураһында һүҙ бара. Республикала был арала тап ошондай эҫе көндәр тора. Ошоға бәйле Идаралыҡ Башҡортостан аша үткән федераль әһәмиәттәге дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлдары буйлап ауыр йөк ташыусы водителдәргә мөрәжәғәт итә. Трассаларҙан оптималь ваҡытта - 21.00-дән 09.00-гә тиклем йөрөргә кәрәк.

✓БР мосолмандарының Диниә назараты ошондай уҡ исемле китап әҙерләй. Был ваҡиға Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назаратын ҡайтанан тергеҙеүгә 20 йыл тулыуға арнала, тип хәбәр иттеләр ведомствоның матбуғат хеҙмәтенән. Баҫмаға мөфтиәт тарихы, төҙөлөшө, президиумы, уҡыу йорттары, район мөхтәсибәттәре, ойошма партнерҙары һәм уның эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт индереләсәк. Мәҡәләләрҙән тыш, китапта фотоматериалдар ҙа урын аласаҡ.

✓ *Һеҙҙе урындағы рептилийҙар тиреһенән эшләнгән сумка йәки аҡса янсығы, орхидеялар гөлләмәһе һәм ҡара мәрйендән мунсаҡтар менән кире ҡайтыу яғына үткәрмәйәсәктәр.*



*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*



# АЛЖИРҒА БАРҺАҢ...

## ептәрен һатып алма

**Ғаиләм менән сит илгә ялға йыйынабыҙ. Ҡыҙым диңгеҙ ҡабырсаҡтары, матур таштар йыйырға ярата. Ләкин ҡайһы бер илдәрҙә уларҙы үҙең менән алып ҡайтыу тыйыла икән, тип ишеттем, шул дөрөҫмө?**

- Ғәҙәттә, таможня тыйыуҙары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе илселек сайттарынан уҡырға була, ҡайһы саҡ был хаҡта яҙылған белдереү ҡағыҙҙарын самолетта осҡанда йәки тәғәйенләнгән пункттағы ҡунаҡханаларҙа ла таратып сығалар. Был хаҡта туристарға үҙ эшенә намыҫлы ҡараған турагент та мәғлүмәт бирә ала, ләкин, үкенескә күрә, ял итергә барыусылар йыш ҡына был йәһәттән хәбәрҙар булмай сыға. Шуға күрә һеҙҙең иғтибарға түбәндәге мәғлүмәттәрҙе еткерәбеҙ.

**Төркиә.** Был илдән үҙең менән ниндәйҙер тауар алып ҡайтыуҙа артыҡ сикләүҙәр юҡ, шулай ҙа 15 мең долларҙан ашыу торған биҙәнеү әйберҙәренә мотлаҡ тауар чеγы талап ителә. Ләкин был тиклем суммаға ювелир әйберҙәре алып сығыу осрағы һирәк була, сөнки ундағы металдың сифаты бик яҡшынан түгел, шуға күрә уларҙың хаҡы ла арзан.

**Египет.** Диңгеҙ мәрйендәре, ҡабырсаҡтар һәм хатта уларҙың бәләкәй генәләрен дә алып сығыу тыйыла. Хәйер, уларҙы сумаҙанда йәшереп, самолетҡа алып барып еткереү ҡыйын булмаһа ла, крокодил һындарына һәм фил һөйәгенән эшләнгән изделиеларға тыйыуҙы "аша атлауы" ҡатмарлыраҡ.

**Таиланд.** Ил сиге аша Будда һүрәтләнештәрен алып сығыу тыйыла. Дөрөҫ, ҡайһы саҡ брелок, открытка һәм статуэтка кеүек ваҡ-төйәк әйберҙәргә "күҙ йомоуҙары" ла ихтимал, ә бына ҙурыраҡ изделие алып сығырға маташҡан өсөн ҙур ғына күләмдә штраф түләтеүҙәре бар. Бынан тыш, ҡиммәтле металл һәм таштар алып сығыу өсөн чек һәм махсус сертификат кәрәк.

**Тунис, Һиндостан.** Урындағы аҡса берәмектәрен (динарҙар һәм рупийҙар) алып сығыу тыйыла.

**Ливия.** Үҙҙәре менән урында етештерелгән теләһә ниндәй тәр тукыма һалып алған туристарҙы үткәрмәйәсәктәр.

**Алжир.** Ептәрен алып сығыу тыйыла.

**Көньяҡ Африка Республикаһы.** Дикобраз энәләре һәм унан эшләнгән әйберҙәр, шулай уҡ акула тештәренән һәм фил һөйәгенән биҙәүестәр тыйыла.

**Австралия.** Һеҙҙе урындағы рептилийҙар тиреһенән эшләнгән сумка йәки аҡса янсығы, орхидеялар гөлләмәһе һәм ҡара мәрйендән мунсаҡтар менән кире ҡайтыу яғына үткәрмәйәсәктәр.

**Сейшель һәм Мальдивтар утрауҙары.** Диңгеҙ мәрйендәрен сығарыу тыйыла. Мальдивтарҙан ҡайтҡанда, сумаҙанығыҙға... акуланың яңаҡ һөйәген һалып алыуҙан тыйыла күрегеҙ, ә Сейшель утрауҙарында йыйған урындағы пальмаларҙың эре емештәрен (ул 20 килонан ашыу тартһа) йәшергән ҡунаҡханағыҙҙа ҡалдырып китеүегеҙ хәйерле булыр.

**Яңы Зеландия.** Киви алып сығыу ярамай. Хатта был емештән әҙерләнгән шарапҡа ла рөхсәт юҡ.

**Бразилия.** Урындағы кейек-януарҙарҙы аулау (үлтереү) сараһы булған изделиеларҙы алыу рөхсәт ителмәй. Һәр мөйөштә һатып торһалар ҙа, панцирь, тире, ҡауырһындар, һөйәктән эшләнгән сувенирҙарҙы алыу хупланмай.

**Япония.** Самурай ҡылысын алып сығыу һис мөмкин булмаған хыял.

**Италия.** Шулай уҡ ҡылыс һәм хәрби биҙәүестәр алыу ярамай.

**Куба.** Урындағы сәнәғәттең киң билдәле продукттары - сигара һәм ром алып сығыу сикләнгән: кеше башына 23 сигара һәм 2 литр ром рөхсәт ителә. Шулай уҡ урында ауланған кейектәрҙең, крокодилдың ҡатырын эшләнгән һындарын сертификат булған осраҡта ғына алып сығырға мөмкин.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

**(Теманың дауамын 6-сы биттә уҡығыҙ).**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ЗАКОНҒА ҺЫЛТАНЫП ТА...

## алдашалар

**Беҙ Өфөлә йәшәйбеҙ. Ирем интернет селтәрендә Ханты-Манси округында вахта ысулы менән эшләргә саҡырып баҫылған иғлан тапты. Эш биреүсе үҙе Екатеринбург ҡалаһында. Телефон аша оҙайлы бәйләнештән һәм иремдең бар-лыҡ шәхси мәғлүмәттәрен ебәргәндән һуң, эш биреүсе Екатеринбург ҡалаһындағы шәхси иҫәпкә 5000 һум күләмендә аҡса күсерергә тәҡдим итте. Был аҡымын ул профсоюзға инеү өсөн тәүге түләү, тип аңлатты. Уның һүҙенсә, закон буйынса, профсоюзға инмәйенсә, вахта ысулы менән эшләү өсөн эшкә урынлашыу мөмкин түгел. Ысынлап та ошондай закон бармы?**

- Вахта ысулы менән эшкә урынлашҡанда профсоюзға тәүге иғанә индереүҙе талап иткән закон юҡ, шуға күрә, эш биреүсенең был аҡымы дөрөҫләккә тап килмәй. Мутлашыусылар ҡулына эләгеүҙән һаҡ булығыҙ.

**Өс йәшлек ғәрип бала тәрбиәләүсе, декрет ялынан сыҡҡан әсәнең ниндәй хоҡуҡтары бар?**

- 18 йәшкә тиклем ғәрип балалары булған ҡатын-ҡыҙҙар, Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт Кодексына ярашлы, айына өҫтәмә дүрт ял көнөнә (262-се статья), шулай уҡ эш хаҡын һаҡламайынса, төп отпуск ваҡытынан тыш, ә өҫтәмә 14 календарь көнгә тиклем отпускыға (263-сө статья), тулы булмаған эш көнөнә (сменаға) йәки тулы булмаған эш аҙнаһына (93-сө статья) хоҡуҡлы.

**Мин Чечнялағы хәрби операциялар ветераны. 28 көнлөк төп отпускыма өҫтәмә рәүештә тағы ла 2 көн алырға хоҡуғым бармы?**

- Хәрби һуғыш ветерандары 15 тәүлек өҫтәмә ял көнө алырға хоҡуҡлы. Был хоҡуҡ "Хәрби хеҙмәткәрҙәр статусы тураһында"ғы Федераль Закондың 11-се статьяһы 5.1 пункты менән нығытылған.

**Мин хәрби хеҙмәткә саҡырылырға тейешмен. Телефон шылтыратыуы буйынса мине военкоматҡа саҡыра алалармы?**

- Граждандарҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу "Хәрби бурыс һәм хәрби хеҙмәт тураһындағы" Федераль Закондың 31-се статьяһы 2-се пункты һәм шул уҡ закондың 26-сы статьяһы 3-сө пунктына ярашлы башҡарыла. Законға ярашлы, хәрби комиссариатҡа саҡырыу бер генә юл - повестка менән - башҡарыла, ә телефон шылтыратыуы буйынса саҡырыу закон тарафынан ҡаралмаған.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА әҙерләне.**

*ҮӘТ ӘЙ!*

# СИТТӘРГӘ ЭШ БАР,

## ә үҙебеҙҙекеләргә?

**Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы 16 төрҙән ашыу дәүләт хеҙмәте күрһәтә. Алты айҙағы эшмәкәрлек йомғаҡтарына арналған кәңәшмәлә ведомство етәксеһе Борис Ғөзәйеровтың билдәләүенсә, ошо осорҙа уларға 800 меңдән ашыу граждан мөрәжәғәт иткән. 51 меңдән артыҡ сит ил гражданы иҫәпкә алынған, уҙған йылдағы күрһәткестән был 5 процентҡа күберәк.**

Башҡортостанға сит ил граждандары ағымының артыуы төбәктә эш булыуына бәйләнгән. Иң күп мигранттар Өфөгә, Туймазыға, Иглин һәм Шишмә райондарына килгән. 1 июлгә ҡарата алынған мәғлүмәттәргә ярашлы, республикала 43 меңдән ашыу сит ил гражданы теркәлгән. Беҙҙең төбәкте күберәк Үзбәкстан, Тажикстан, Әзербайжан граждандары үҙ итә. Сит илдәр араһында Төркиә һәм Вьетнам беренсе килә.

Миграция хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре төрлө социаль объекттарҙа патруллек алып бара (сауҙа, сәнәғәт майҙандары, торлаҡ участкалары). Ошо арала 11 меңдән ашыу объект тикшерелгән. БР буйынса Эске эштәр министрлығы менән берлектә ойошторолған төнгө рейдтар ҙа һөҙөмтә биргән. Көндөҙ илгә законһыҙ үткән кешеләрҙе табыуы ҡыйын, ә төнөн мигранттарҙы осратыуы күпкә еңелерәк.

Борис Ғөзәйеров, сит ил граждандарын Рәсәйҙән сығарыуға бәйле эштәрҙе камиллаштырырға кәрәк, тип билдәләне. Мәҫәлән, ҡабул ителгән 345 ҡарарҙың 215-е генә тормошҡа ашырылған. Республика идаралығының 18 бүлексәһе мигранттарҙы илдән ҡыуыу буйынса бер эш тә күрһәтмәгән.

**"Башинформ".**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Быуындар һыҙлауынан

❖ Уҫаҡ ағасының бөрөләрен һәм йәш япраҡтарын ваҡлап, марляға төрөргә һәм ҡайнап ултырған һыуға төшөрөргә. 1-2 минуттан алып, һыҙлаған быуындарға һалырға. Йылы сыҡмаһын өсөн өҫтөнән йомшаҡ шарф менән бәйләп ҡуйырға. Һыҙлау тиҙ арала юҡҡа сығыр.

❖ 50 грамм лавр япрағын йыуып, һалҡын һыу менән сайҡатырға һәм эмаль кәстрүлгә һалып, 250 мл һалҡын һыу ҡойорға. Һауытты талғын утҡа ҡуйып, һыу 1 - 1,5 см-ға кәмегәнсе ҡайнатырға. Килеп сыҡҡан шыйыҡлыкты һөҙөргә, 4 тигеҙ өлөшкә бүлеп, 4 һауытҡа ҡойоп ҡуйырға. Көнөнә бер һауыттағы шыйыҡлыҡты яйлап эсергә. Ауыҙға алғас, шунда уҡ йотмаҫҡа, бер аҙ кәнфит кеүек һурырға. Ашарҙан алда ла, һуңынан да ярай. 4 көн дауалангандан һуң, икенсе курсты 1,5 йылдан ҡабатларға. Был дауа организмды таҙарта, нейтралләштереү һәм ялҡыныуһыҙ булдырмау һөҙөмтәһенә эйә.

❖ Ҡаймаҡ ҡуйылығындағы зәңгәр балсыҡты сепрәккә һылап, һыҙлаған быуындарҙы урарға һәм 2-3 сәғәткә ҡалдырырға. Әгәр ҙә 2-3 сеанстан һуң һыҙланыу үтмәй, хатта көсәйә икән, балсыҡ әҙерләгән һыуҙы магнитландырырға кәнәш итәм. Балсыҡты быңдай ысул менән ҡулланыу һөҙөмтәһендә варикоз шештәре лә кәмей.

❖ Күп тапҡырҙар һыналған ысул: 1 ҡалаҡ балды 1 ҡалаҡ тоҙ менән болғатырға, етен тукымаға һалырға, ауыртҡан урынға һалып, компресс ҡағыҙы менән ябырға һәм йөн тукыма менән урарға. Быңдай компрестарҙа төнгөлөккә эшләү ҡулайлыраҡ, иртән компресты һыу менән йыуып төшөрөгөҙ.

❖ Олоғайған һайын быуын туҡымалары йәйенкеләнә, һөҙөмтәлә уның өҫкө ҡатламы тартыла һәм синовиаль шыйыҡлыкты ҡыҫырыҡлап сығара. Һығылмалылыҡ юғала, һәр хәрәкәт ауыртыу тыуҙыра. Ауыртыуҙан ҡурҡып, кеше тағы ла аҙыраҡ хәрәкәтләнә. Был осраҡта киреһенсә хәрәкәт итергә кәрәк. Иртән уянғас та ҡулдарҙы баш аҫтына һалып, уларҙы "йоҙаҡ" ярҙамында тоташтырырға һәм ҡулдарҙы тартырға. Еңелсә генә тауыш ишетеләсәк. Бынан һуң ҡулдар йылынып китә, бармаҡтарҙы хәрәкәтләндереү еңеләшә.

❖ Йоҡлар алдынан аҡ шыршы майы менән һөртөнөргә. Иртән тороуға быуындар шеше кәмегән була, быуындар еңел хәрәкәтләнә.

❖ 20 минутҡа алма һеркәһенән яһалған компресс һыҙланыуҙарҙы баҫа.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Бөрйән балын милли ағас һауыттарға һалып, күстәнәс итеп биргәс, бөтөнләй аптырап ҡалдылар. Был илдәр халыҡтары телендә "күстәнәс" тигән һүҙ ҙә, төшөнсә лә булмауы асыҡланды. "Бүләк" тип ҡабул иттеләр күстәнәсте.*



ҺАБАҠТАР

# ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ ЯҠШЫ, ТИК...

## Күстәнәсһеҙ ҡунаҡ йәмһеҙ

**Һәр бер халыҡтың үҙенә генә хас милли һыҙаттары була. Мәҫәлән, беҙҙең халыҡҡа ихласлыҡ, ябайлыҡ хас. Берәй изгелек, яҡшылыҡ эшләһәк, башҡалар кеүек ҡысҡырып йөрөмәйбеҙ, "Изгелек эшлә лә һыуға һал - халыҡ белер, халыҡ белмәһә - балыҡ белер әле" тип йөшәйбеҙ.**

Башҡорт Ер йөҙөндәге иң ҡунаҡсыл халыҡтыр. Яңыраҡ сит ил ҡунаҡтары - Һиндостан, Ҡытай туристары беҙҙең өйҙә булғайнылар. Улар беҙҙең ҡунаҡсыллыҡҡа аҙап, унайһыҙланып ҡалдылар. "Беҙ аҡса түләһәк тә, шулай яратып бер ерҙә лә ҡабул итмәнеләр әле", тинеләр. Ә Бөрйән балын милли ағас һауыттарға һалып, күстәнәс итеп биргәс, бөтөнләй аптырап ҡалдылар. Был илдәр халыҡтары телендә "күстәнәс" тигән һүҙ ҙә, төшөнсә лә булмауы асыҡланды. "Бүләк" тип ҡабул иттеләр беҙҙең күстәнәсте.

Эйе, беҙ үҙебеҙ, онотопмо, башҡа сәбәптәнме, ҡунаҡтарҙы күстәнәсһеҙ оҙатһаҡ, оятҡа ҡалғандай тоябыҙ үҙебеҙҙе. Берәй йыйн табып, сәләмебеҙҙе күстәнәскә төрөп ебәрә һалабыҙ. Күстәнәс - ҡунаҡтан ҡайтып инеү менән өйҙә ҡалған бала-сағаға тотторол, уларҙың ҡыуаныҫын күреү, ҡунаҡ табынының ризығын өйҙәгеләргә лә татытыу, ҡунаҡ саҡырған кешенең ихласлығын сағылдырыу ул. Күстәнәс, миненсә, ҙур ҙа, бәләкәй ҙә булмай. Шуға ла күстәнәстең күләме тураһында һүҙ ҙә алып барырға кәрәкмәйҙер. Әле мин хужаның ҡунаҡсыллығы, иғтибарлылығы тураһында һүҙ алып барам. Халҡыбыҙҙың ошо матур ғәҙәтенә иғтибарығыҙҙы йүнәлтмәксе булам. Беҙ өләсәйҙәребеҙҙең , "улымдың ҡыҙына", "минең ҡаршыма йүгереп сыҡҡанға" тип, кеҫә төбөнә 1-2 кәнфит алып ҡайтыуын да оло ваҡиға итеп ҡабул итә инек. Ул күстәнәсте ауыҙ эсендә оҙаҡ итеп һурып йөрөтә инек. Ә һеҙҙең, хәҙерле "Киске Өфө" уҡыусылары, халҡыбыҙҙың ошо матур йолаһына, ғәҙәтенә - күстәнәскә ҡарашығыҙ нисек? Күстәнәскә бәйле булған ваҡиғалар, иҫтәлектәр менән уртаҡлашһағыҙ ине.

### Ашау-эсеү тиҙ онотола

**Башҡорт халҡының милли һыҙаттарын әйтеп үттек инде. Ябайлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, изгелек, ярҙамсыллыҡ, ихласлыҡ һ.б. Ә шулай ҙа был һыҙаттар күберәк беҙгә, ауыл кешеләренә, тура киләләр, тим.**

Ауылға берәй таныш түгел кеше килеп төшһә лә, хатта ҡаланан командировкаға ғына килгән кешеләрҙе, шул уҡ журналистарҙы, бөтмәҫтөкәнмәҫ тикшереүсе, соҡсоноусыларҙы лыҡ булғансы ашатып-эсереп ебәрә ауыл кешеһе, иң түрендә йоҡлатып сығара, күстәнәсен тейәп оҙата. Шул уҡ кешене ул йөшәгән ҡалала осрат әле - ул һинең эргәнән баш ҡағып ҡына үтеп китеүе мөмкин. Нинә ҡалаға китеп йәшәгәндәр шулай ҡатлы-ҡатлы кешегә әйләнә икән? Күпмелер арауыҡта улар таныштарын да күрмәмешкә һалышырға, күршеһен дә танымаҫҡа, туған теләндәге гәзит-журналды ла яҙҙырмаҫҡа мөмкиндәр. Ҡалаға китеп йәшәгән ауыл кешеләренең ошо сәйер ғәҙәте гел аптырата мине.

Аллаға шөкөр, мохтажлыҡ кисермәйбеҙ, ҡалаға барһаҡ, ҡунаҡхана ҡунып сығырлыҡ ҡына аҡса ла табабыҙ. Эш бында түгел. Мәҫәлән, оло-оло ойошмалар менән хеҙмәттәшлек итеп, уларҙы кеҫәләренән бер тин сығармай һыйлап та, һуңынан уларҙың офисында талсығып ултырыу осраҡтары булғылай. Ауылдан килгән кешегә бер шәшке сәй йә кофе тәҡдим итеп булмаймы икән ни? Европаса, яныса йәшәйем тип, үҙебеҙҙең асылды, ҡунаҡсыллыҡ ғәҙәтен онотоу яҡшы түгел дәһә. Хәйер, ауылға ҡайтҡас, уларҙың да иҫенә төшә был ата-баба йолалары. Ҡунаҡ итмәй ҡара: үпкәләшеүгә, әрләшеүгә тиклем барып етеүселәр бар. Ә уҙҙәре... Ғөмүмән, беҙҙең яратҡан "Киске Өфө"лә ошо мин күтәргән мәсьәлә буйынса ла фекер алышыуҙар көтөп ҡалабыҙ.

**Гөлсөм ӨМӨТБАЕВА,**
**Бөрйән районы.**

КИҪӘТӘБЕҘ

**Йәй - сәйәхәтселәр өсөн көтөп алынған миҙгел. Һуңғы йылдарҙа улар араһында бигерәк тә сит илгә сығыусылар һаны арта. Сит илгә сәйәхәтте төрлө туристик агентлыҡтар ойоштора. Нимә ул туристик агентлыҡ? Ял итергә барырға теләүсе бындай агентлыҡ һайлағанда тәү сиратта нимәгә иғтибар итергә, сит илдә үҙен нисек тоторға, һаулыҡҡа бәйле ҡыйынлыҡтар тыуғанда ҡайҙа мөрәжәғәт итергә тейеш? Барлыҡ был һорауҙарҙы беҙ киң билдәле CORAL TRAVEL туристик оператор вәкиле - "Райхон" туристик агентлығы генераль директоры Райхон СӘЛИХОВАға йүнәлттек.**

# ЯЛЫҢ МАТУР ҮТЕР...

## хәүефһеҙлек хаҡында онотмаһаң



### Ҡыҙыҡлы бизнес, әммә...

Туризм бизнесында оҙаҡ йылдар эшләйем һәм был өлкәләге барлыҡ нескәлектәрҙе яҡшы аңлайым. Мин етәкләгән туристик агентлыҡ CORAL TRAVEL туристик оператор менән рәсми килешеү нигеҙендә эшләй. Ғөмүмән, һәр туристик агентлыҡ - туристарға белешмә биреүсе ойошма һәм туристик оператор менән турист араһындағы аралашсы ролен үтәй. Туризм - бик ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс һәм күптәр күҙлегенән ҡарағанда килемле өлкә, ләкин барыһына ла туризм бизнесы "баш эймәй". Был өлкәлә үҙе сәйәхәтте яратҡан һәм, иң мөһиме, был шөғөлөнә күплән аҡса түгергә әҙер кеше генә эшләй ала, сөнки ниндәйҙер илгә сәйәхәт тәҡдим итер өсөн туристик агентлыҡ етәксеһе ул ил хаҡында өйрәнергә һәм ундағы барлыҡ нескәлектәрҙе белергә тейеш. Ошо осраҡта ғына ул туристҡа һәйбәт һәм сифатлы туристик тауар тәҡдим итә ала. Шулай уҡ туризм өлкәһендә эшләүсе үҙенә мөрәжәғәт итеүсе туристарҙы яратырға, кеше менән һәйбәт һәм ихлас күңелдән аралаша белергә тейеш. Ләкин турист тарафынан да кешелекле ҡараш булыуы шарт. Ике яҡтың да бер-береһен ихтирам итеүе генә яҡшы һөҙөмтәләргә килтерергә мөмкин.

### Дөрөҫ һайланған агентлыҡ

Бөгөнгө көндә туристик агентлыҡтарҙың иҫәбе-һаны юҡ, ә йәй миҙгеле уларҙың һанын тағы ла арттыра. Тик, ҡыҙғанысҡа күрә, улар араһында законлы һәм намыҫлы эшләүселәр менән бер рәттән, мутлашыусылар ҙа күп. Сит илгә ял итергә барырға теләүсе нисек итеп үҙен күңелһеҙ ваҡиғаларҙан араларға тейеш?

Мутлашыусылар, ғәҙәттә, теге йәки был илгә үтә лә осһоҙ хаҡҡа путёвка тәҡдим итә, кешене төрлө махсус акция һәм бонустар менән ҡыҙыҡһындыра. Ләкин үтә лә түбән хаҡ шунда уҡ уйға һалырға тейеш. Ни өсөн башҡа агентлыҡтарҙа ошондай уҡ путёвка күпкә юғары хаҡҡа тәҡдим ителә, ә бында арзаныраҡ? Билдәле булыуынса, "Буш сыр - ҡапҡанда ғына". Шуға күрә осһоҙ хаҡҡа путевка алыу ҡыуаныусы оҙаҡҡа һуҙылмаҫҡа мөмкин. Бындай фирмалар кешенең аҡсаһын алып ҡала, ләкин уның ялын ойоштороу өсөн бер ни ҙә эшләмәй, йәғни туроператорға аҡса күсермәй, тимәк, юл билеттары, ҡунаҡхана һәм башҡа хеҙмәттәр өсөн түләмәй. Бындай алдашыу осраҡтары бихисап, һәм күп осраҡта кеше аҡсаһын кире ҡайтара алмай. Үҙегеҙҙе ошондай күңелһеҙлектәрҙән аралау өсөн үтә лә иғтибарлы булыу мөһим.

Туристик агентлыҡ менән килешеү төҙөр алдынан, тәү сиратта, уның ниндәй туристик операторҙың вәкиле булыуына иғтибар итегеҙ. Законлы нигеҙҙә эшләүсе туристик агентлыҡтар, ғәҙәттә, бөтәһенә лә билдәле булған һәм ышанысы туристик операторҙар менән рәсми килешеү нигеҙендә эш итә. Шулай уҡ килешеүҙә туроператор яғынан туристың финанс йәһәттән тәьмин ителеү-ителмәүен дә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмағыҙ, сөнки хәҙер ул ҡәтғи талаптарҙың береһе. Әгәр ҙә һеҙгә тәҡдим ителгән килешеүҙә был хаҡта һүҙ юҡ икән, тимәк, һағайырға урын бар. Бөгөнгө көндә финанс тәьмин итеү күләме уртаса 100 миллион һумды тәшкил итә, ләкин уның артыуы көтөлә.

Шулай уҡ мөрәжәғәт итергә теләгән агентлыҡ, туроператор хаҡында интернет селтәрендә күп мәғлүмәт табырға була. Һәйбәтләп уҡып сығырға, туристар ҡалдырған баһа һәм тәҡдимдәр менән танышырға ыбанмағыҙ. Ҡайны бер агентлыҡтар үҙҙәренең туризм баҙарында оҙаҡ йылдар эшләүенә баҫым яһай. Был мөһим фактор, әлбиттә, ләкин төп урынды биләмәй. Шулай уҡ мин халыҡты агентлыҡ биләгән офис майҙанына ҡарап фекер йөрөтмәҫкә саҡырам, сөнки ҙур квадрат метрҙар биләп тә, һәйбәт ял ойоштора алмаған һәм шул уҡ ваҡытта бәләкәй генә офиста эш итеүсе, ләкин абруйлы ял минуттары бүләк итергә һәләтле агентлыҡтар бар. Үҙен һәм туристарҙы хөрмәт итеүсе туристик агентлыҡ хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә төрлө семинарға йөрөй, белемен камиллаштыра һәм үҙе вәкил булараҡ сығыш яһаған туристик операторҙа өс ай һайын аттестация үтә.

### Хәүефһеҙлегең - үҙ ҡулыңда

Бөгөнгө көндә туристар һуңғы йылдарҙа ҡалыплашҡан Төркиә, Египет, Ғәрәп Эмираты кеүек маршруттарҙан тайпылып, башҡа илдәргә лә йыш сыға башланы. Ләкин сит тарафтарҙа туристарҙы матурлыҡ һәм һәйбәт ял ғына түгел, ә хәүеф тә көтөргә мөмкин. Үҙегеҙҙе күңелһеҙ минуттарҙан аралар өсөн ҡайны бер ҡағиҙәләрҙе үтәү мөһим.

Ниндәй илгә барһа ла турист, тәү сиратта, унда ҡунаҡ ҡына икәнлеген онотмаҫҡа тейеш. Һәм, тәбиғи, илдең закон, йола һәм ғәҙәттәрен боҙмаҫҡа, урындағы халыҡ менән ихтирамлы булырға бурыслы, сөнки туристҡа булған ҡараш уның үҙен нисек тотоуына бәйле.

Шулай уҡ документ, аҡса, ҡыйбатлы әйбер, фото һәм видеоаппаратураларына ҡарата ла иғтибарлы булырға кәрәк. Ҡайҙалыр сыҡҡанда үҙегеҙ менән алмаған ҡыйбатлы әйберҙәрҙе сейфҡа бикләргә онотмағыҙ, ҡала буйлап сәйәхәткә сыҡҡанда документ һәм аҡсағыҙҙы күҙ күреме ерҙә тотоғоҙ. Шулай уҡ урамда ят кешеләр менән аралашмаҫҡа тырышығыҙ, ниндәйҙер һорау килеп тыуған осраҡта оҙатып барыусыға мөрәжәғәт итегеҙ.

Сит илдә ял итеүселәр төрлө аттракционда, һыу мотоциклында йөрөүҙән, тау йылғалары буйлап ағып төшөүҙән ғүмер һәм һаулыҡ өсөн үтә лә хәүефле икәнлеген аңлап етмәй. Шулай уҡ ил буйлап төрлө экскурсиялар һайлағанда ла иғтибарлы булыу мөһим. Бигерәк тә урамда үтә лә осһоҙ хаҡҡа тәҡдим ителгән экскурсиялар туристы уйландырырға тейеш, сөнки сифатлы һәм хәүефһеҙ экскурсия осһоҙ була алмай.

Тағы ла бер иҫкәрмә хаҡында әйтеп үтеү мөһим. Агентлыҡтан туристик ваучер алған ваҡытта ял итерга юлланыусы билеттар, ҡунаҡхана урынлашыу өсөн талондан тыш, мотлаҡ рәүештә страховкалау сумаһы күрһәтелгән медицина страховкаһының булыуына иғтибар итергә тейеш. Медицина страховкаһыҙ сит илгә сығып китеү хәүефле, сөнки ниндәйҙер ауырыу йәки бәхетһеҙлек аяҡтан йыҡһа, нәҡ ошо документ сифатлы һәм күрһәтелгән сумма сиктәрендә бушлай медицина ярҙамы алыу мөмкинлеге бирәсәк. Тик турист алкоголь эсемлек эсеп, ниндәйҙер күңелһеҙлеккә тарығанда һәм эҫе бәргән осраҡта медицина страховкаһы ярҙам итмәй. Шуға күрә, хөрмәтле туристарыбыҙҙы һаҡ һәм үҙҙәренең һаулығына иғтибарлы булырға саҡырам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, бөгөнгө көндә сит илгә ял итергә сығыу ғәҙәти хәлгә әйләнде. Кемдер хатта йылына ике-өс тапҡыр барырға ла өлгөрә. Сит илгә сәйәхәттән бергәүҙәр матур хәтирәләр, күңел көрлөгө, оҙаҡҡа етерлек дәрт-дарман алып ҡайтһа, икенселәр төрлө күңелһеҙ ваҡиғаларға ла тарып ҡуя. Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, ти. Шуға күрә үҙ һаулығыбыҙға, ғүмеребеҙгә битараф булмайыҡ һәм ял иткән ваҡытта ла хәүефһеҙлек хаҡында онотмайыҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# ӘХМӘТ УРАЛЛЫНЫҢ БАЛАЛАРЫ...

## туғандарын эҙләп килгән Уралға

**Совет осоронда, тимер ҡоршау солғанышында булғанда, төрлө сәбәптәр арҡаһында сит тупраҡты төйәк иткән милләттәштәребеҙҙең рухы тыныслыҡ тапмаймы, әллә йән тартмаһа ла, ҡан тарта тигәндәре хаҡмы, әммә демократия илдәре иҫә башлау менән Башҡортостанға тамырҙарын, нәҫел-нәсәп ебен юллап килеүселәр юҡ түгел. Ошо көндәрҙә Төркиә Республикаһынан килгән рәсми делегация составында булған дүрт бер туған Уралылар ҙа ошо изге ниәт менән юлланған Башҡортостанға.**



Уларҙың аталары Әхмәт 1896 йылда Өфө ҡалаһында тыуа. Атаһының исеме Мәхмәт (моғайын, Мөхәммәттер), әсәһенеке - Мәмдүхә. Мәхмәт XX быуаттың 20-се йылдарындағы боланан һуң Иранға барып сыға. Унда Риза Шаһ Пехлеви һарайында һаҡсылар командиры була. 1925 йылда Төркиәгә күсенә, Анталияның Ығдыр ҡалаһы эргәһендәге Маркара таможняһында эшләй. Таможня ябылғас, шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Тәүге ҡатыны вафат булғас, Зөһрә исемле ҡыҙға өйләнә. Уларҙың Өҙәр, Эрол, Эртугрул исемле улдары һәм Арзу, Ниһаль исемле ҡыҙҙары донъяға килә. 1960 йылда Әхмәт донъя ҡуя.

Заманалар үҙгәреп, Башҡортостан менән Төркиә араһында төрлө өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек бәйләнештәре булдырылғас, республиканан барған төрлө ижад коллективтары, театр, фольклор төркөмдәренең сығыштары менән ҡыҙыҡһынып, унда уҡыған студенттар менән аралашып, Ураллылар ҡасан да булһа Башҡортостанға килеү хыялы менән йәшәй башлай. Һәм, ниһайәт, бындай форсат сыға ла инде.

"Атайыбыҙ, ысынлап та, бик бәхетле кеше булғандыр, сөнки бында йәшәү - үҙе бер бәхет. Башҡортостандағы тәбиғәтте, Урал тауҙарын, Урал (Яйыҡ) йылғаһын, Бөрйән районын, Шүлгәнташ мәмерйәһен күреп хайран ҡалдыҡ. Килеп күрергә тип хыяллана, бер тапҡыр ҙа күрмәһәк тә, ошо илде һағына торғайныҡ. Атайыбыҙҙың Ураллы фамилияһын юҡтан ғына алмағанлығын хәҙер килеп аңланыҡ. Төркиәлә тыуып, шунда үҫһәк тә, тамырҙарыбыҙҙа башҡорт ҡаны аҡҡанын тоя инек, шул ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ беҙҙе Башҡортостанға алып килде лә инде. Үҙебеҙҙе сит итеп һиҙмәнек, өйөбөҙҙөң, тупрағыбыҙҙың ошонда икәнлеген тойҙоҡ. Һабантуйҙарҙа йөрөп, ҡарап, күреп, шәжәрәләргә һоҡландыҡ, улар бер нисә быуынды үҙ эсенә ала. Тамырҙар бик тәрәнгә барып тоташа, беҙ ҙә үҙебеҙҙең нәҫелебеҙҙе тапһаҡ, ныҡ шат булыр инек, килеүебеҙҙең сәбәбе лә шуға бәйле бит инде", - тип, күңелдәрендә тулышҡан хис-тойғолары, тәьҫораттары менән уртаҡлаша Ураллылар.

Арзу ханым ғүмер буйы Европала йәшәгән, шулай уҡ Европа илдәрен күп гиҙгән кеше булараҡ: "Бында килеп, бер Европа ҡалаһын тап итермен тип уйламағайным, Германиянан һис бер айырмаһы юҡ, бөтөн ер таҙа, ялтырап тора", - тип һоҡланыуын белдерҙе. Шулай уҡ уларҙы ҡурай моңдары ла әсир иткән. "Роберт Юлдашевтың башҡарыуында ҡурай моңдарын тыңлағанда тәндәр зембереләп китте, күктәргә осҡандай булдыҡ, ысынлап та күктәргә осора торған илаһи моң был. Бик оҡшаны. Үҙебеҙҙе ошо ерҙең хужаһы итеп тойҙоҡ", - тине Ураллылар.

"Киске Өфө" гәзите редакцияһы бүләк итеп тапшырған "Башҡорт халҡының 400 йыры" китабын ҡулдарына алып, бер туған Ураллыларҙың нисек ҡыуанғанын күрһәгеҙ икән. Хатта улар икенсе сәйәхәттәрендә башҡорт йырҙарын өйрәнеп килергә лә вәғәҙә бирҙе. "Эрол туғаныбыҙҙың тауышы иҫ киткес матур, ул мотлаҡ башҡортса йырларға өйрәнер", - тинеләр. Ә әлегә башҡорт телен Өҙәр бей яйлап өйрәнә башлаған. "Атайыбыҙ беҙ бәләкәй саҡта вафат булды, аралашыу төрөк һәм әсәйебеҙҙең туған теле - әзербайжан телендә барҙы. Шуға әзербайжан телен беләбеҙ, башҡорт телендә өйрәтеүсе булманы, - ти ул. - Ләкин шуны әйтә алам: башҡорт теле менән әзербайжан телендә 40 процент самаһы уртаҡ һүҙҙәр бар".

Һөйләшеү нисек кенә бармаһын, әңгәмәселәрем ике һүҙенең береһендә мәҡәлә гәзиттә баҫылып сығып, нәҫел-нәсәптәренең берәйһе табылырына йәки уларҙы белеүселәр булырына өмөтләнеп, үҙҙәренә хәбәр итеүҙәрен ҡабат-ҡабат үтенде. Беҙ ҙә уларҙың үтенесенә ҡушылабыҙ һәм Әхмәт Ураллыны (Башҡортостанда уның фамилияһы икенсе булыуы көн кеүек асыҡ), уның Башҡортостандағы нәҫел-нәсәбен белеүселәр, ишетеүселәр булһа, редакция менән бәйләнешкә сығыуҙарын һорайбыҙ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Осрашыу һуңынды тел осонда торған һорауҙы бирмәй түҙмәнем: "Ғәҙәттә, кеше ниндәйҙер яңы тарафҡа барһа, үҙенең тыуған ерен һағынып ҡайта, ләкин ошо күргән ерендә йөрәгенең бер өлөшөн ҡалдырып китә..." Тел төбөмдө һорауҙы биреп бөтмәҫ элек аңланы Ураллылар һәм бер тауыштан тигәндәй: "Беҙ йөрәгебеҙҙең ниндәйҙер өлөшөн генә түгел, тотош йөрәгебеҙҙе Башҡортостанда ҡалдырабыҙ. Бында беҙҙең тупраҡ, бында беҙҙең Ватан", - тип яуапланы. Торған ергә ҡарағанда, тыуып-үҫкән ил яҡшы, тиһәләр ҙә, тамырҙарҙа аҡҡан ҡан, гендар буйынса бирелгән ата-бабалар рухы кешене барыбер ҙә тәүтамырҙарына, шәжәрә тамырҙарына, нәҫел ағасының тамырҙары ереккән ергә саҡырып, тартып торалыр, моғайын...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

## ХАЛҠЫБЫҘ ТРИБУНАҺЫ

**"Киске Өфө" гәзите тураһында һүҙ башлағанда иң тәүҙә уның тәрбиәүи әһәмиәте тураһында әйтергә кәрәктер.**

Был гәзиттә тәрбиә тураһындағы мәҡәләләр көсләп, баҫым яһап түгел, ә ҡәҙимге бер һөйләшеү, аралашыу, аңға һеңдереү рәүешендә тәҡдим ителә. Авторҙар ҙа теге йәки был идеяны ғына дөрөҫ тип тәҡрарламай, ә уҡыусы менән, шулай уҡ башҡа авторҙар менән йәнле һөйләшеү ҡора. Шуныһы менән был гәзиттең форматы ла, эстәлеге лә отошлолор, минеңсә.

Мин үҙем гәзиттәге бөтөн мәғлүмәтте лә күҙҙән үткәрәм, ә бына Әхмәр-Ғүмәр Үтәбай яҙғандарҙы айырыуса түҙемһеҙлек менән көтөп алам. Уның ябай ҙа, аңлайышлы ла, шул уҡ ваҡытта фәлсәфәүи ҙә итеп яҙыуы оҡшай. Ошондай авторҙарыбыҙ тағы ла күберәк булһын ине башҡорт баҫмаларында. Ғөмүмән, "Киске Өфө" - ысын-ысыны менән халыҡсан гәзит, халҡыбыҙ трибунаһы ул.

**Салауат МОСТАФИН.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



## ЫРЫУЫҢДЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**Яҙғы һабан эштәре тамамланыу башҡорт халҡы өсөн элек-электән һабантуйҙар мәле булып хәтерҙә һаҡланһа, бөгөн һабан байрамын әкренләп кенә Шәжәрә байрамдары, Ырыуҙар хәрәкәте саралары алмаштырып бара кеүек. Ысынында нимә һуң ул Шәжәрә байрамдары, Ырыуҙар хәрәкәте саралары һәм уларҙың әһәмиәте нимәлә? Ошо һорау менән БР Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты этнология бүлеге мөдире Юлдаш ЙОСОПОВҡа мөрәжәғәт иттек:**

- Ырыуҙар хәрәкәте сәйәси, иҡтисади мәсьәләләр менән ныҡ бәйле. Тәүге ырыуҙар хәрәкәте Ишембайҙа авария булып, ҡоролма йырылып, мазут ағыу, уның зыяратты йыуып алып китеүе һөҙөмтәһендә башланды. Шунда халыҡ "Юрматы" атамаһы аҫтында экологик хәрәкәт булараҡ тупланды. Торатауҙы сеймал итеп ҡулланыу мәсьәләһе ҡалҡып сыҡҡайны, тағы юрматылар күтәрелде. Бының менән нимә әйткем килә: ырыуҙар хәрәкәте, ырыу аңы экология мәсьәләләренә лә ныҡ бәйле. Бәлки, кемдер бында, уҙған быуаттың 90-сы йылдарындағы кеүек, трайбализм күренешен күрәлер, ләкин башҡорттар элек-электән аҫаба булып, ырыуҙарға бүленеп, бер-береһен белеп йәшәгәнлеген дә онотторға ярамай. Башҡорттар өсөн ғаиләһен, нәҫелен, ырыуын белеү - идентификацияның иң дөрөҫ ысулдарының береһе, милләтте милләт иткән нәмәләр - үҙеңдең сығышыңды, ырыуыңды, аҫабалығыңды белеү.

Беҙ, йәш ғалимдар, ырыуҙар хәрәкәтен тергеҙеп, милләттең берлеген тәьмин итергә теләйбеҙ. Рәсәй ғалимдары ла, башҡалар ҙа бөгөн йәштәрҙе нисек тәрбиәләү тураһында баш вата, берәү ҙә дөйөм, әҙер рецепт килтереп тоттормай. Ә бит, тәү сиратта, дөйөм халыҡтан бер милләт яһау ынтылышы барған ваҡытта аҙ һанлы халыҡтар алдында "Нисек юғалмаҫҡа?" тигән һорау иң мөһиме булып килеп баҫа, йәғни милли идея булып тамырҙарыңды, ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәрен белеү торорға тейеш.

Ырыуҙар мәсьәләһе менән Раил Кузеевтан башҡа берәү ҙә шөғөлләнмәгән дә, шөғөлләнмәй ҙә. Йәғни ул Урта быуаттар археология һәм дөйөм тарих аша, күҙәтеү планында ғына ҡарала. Рим ағай Йәнғужин тарихнамә (тарих белеменең үҫешен һәм тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнеү фәне) мәсьәләһен күтәрҙе, әммә эш алға китмәне. Был теманы ниндәйҙер институт үҙ өҫтөнә алып, ныҡлы, етди шөғөлләнергә тейеш.

Беҙҙең Гуманитар тикшеренеүҙәр институты ошо ҙур амбразураны нисек тә ҡапларға тырыша, әммә мөмкинлектәребеҙ юҡ. Иң мөһиме, бындай ихтыяж бар, һәм уны урындағы халыҡ та аңлай. Шуға күрә Һабантуй - үҙ урынында, ул эштән һуң күңел асыу, байрам тип ҡабул ителә, ә Ырыуҙар хәрәкәте саралары, Шәжәрә байрамдары байрам булып ҡына ҡалмаҫҡа, юғарыраҡ кимәлгә күтәрелергә, анығ һөҙөмтәләргә килтерергә тейеш.

✓ *Ҡурай үләне уның менән эш итеүсенән үтә һаҡ мөғәмәлә талап итә. Тап шуның кеүек, ҡурай хаҡындағы һүҙ ҙә уның үләне менән эш иткәндәй һаҡсыл, аяулы мөнәсәбәт талап итә.*



# КЕШЕГӘ БӨГӨН

## ҡурай моңо кеүек тәбиғи

**"Мөхәмәтша Буранғоловтың мәғлүмәттәренән билдәле булыуынса, 1912 йылдың 26 авгусында Ырымбур ҡалаһында 1812 йылғы Ватан һуғышының 100 йыллығы айҡанлы тантаналы йыйын була. Башҡорттар олатайҙарының яу кейемен кейеп, атҡа атланып, хәрби парадта ҡатнаша, парадтан һуң ҡурайсылар ярышы була. Был тантаналарҙа әүҙем ҡатнашҡандары өсөн башҡорт халҡы исеменә батшанан ҡотлау телеграммаһы килә, айырыуса фиҙаҡәрлек күрһәткәндәре юбилей миҙалдары менән бүләкләнә. Шул айҡанлы 1912 йылдың октябрь айында улыс үҙәге Яҡуп (хәҙерге Көйөргәҙе районы) ауылында "Губернатор бәйгеһе" тип аталған ҡурайсылар ярышы үткәрелә. Был ярыштарҙа һәм 1920 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында Башҡортостан хөкүмәте исеменән үткәрелгән ҡурайсылар ярышында төрлө төбәктәрҙән һайланып килгән 50-60-лаған ҡурайсылар араһынан Ғәбит сәсән беренсе урынды яулай", тип яҙа ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдинов үҙенең 2011 йылда донъя күргән "Ҡурай һәм ҡурайсылар" китабында.**
**Ә инде быйыл 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған ҡурайсылар йыйыны 30 июндә шул уҡ Көйөргәҙе ерендә үтте. Унда Башҡортостандан һәм күрше өлкәләрҙән барлығы ике мең ярым самаһы ҡурайсы ҡатнашыуы күпкә ишара. Шул йыйында ҡатнашыусы Башҡортостан Ҡурайсылар союзы идараһы ағзалары - Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының өлкән уҡытыусылары, академияның башҡорт музыкаһы факультетының декан вазифаһын башҡарыусы, 2012 йылда Республика ҡурайсылар конкурсында Гран-при яулаусы, Йомабай Иҫәнбаев исемендәге ҡурайсылар бәйгеһе лауреаты Венер ЙЫЛҠЫБАЕВ менән "Тылсымлы ҡурай" телетапшырыуы авторы һәм алып барыусыһы Марсель ВАХИТОВ ҡурай һәм милли сәнғәтебеҙ хаҡындағы әңгәмәне Көйөргәҙе районында уҙған сараны иҫкә алыуҙан башланы.**

**▸ Егеттәр, милли сәнғәтебеҙҙең йөҙөк ҡашы булған ҡурайыбыҙ, уға бәйле башҡа проблемалар хаҡында һүҙ алып барырға йыйынабыҙ. Һөйләшеү темаһының мөһимлеге һеҙҙе тулҡынландырмаймы?**

**М. Вахитов:** Ҡурай тураһында ниндәйҙер һүҙ әйтеүҙе оло яуаплылыҡ тип һанайым. Шуға күрә лә ҡурай хаҡында тарихи юҫыҡта ниндәйҙер төплө һүҙ әйтергә дәғүә итмәһәк тә, ҡурайҙы ихтирам иткәнгә, уның яҙмышына битараф булмағанға ғына бындай әңгәмәлә ҡатнашырға баҙнат итәбеҙ. Ағайҙар беҙҙе ғәфү итһен...

**В. Йылҡыбаев:** Ҡурай үләне уның менән эш итеүсенән үтә һаҡ мөғәмәлә талап итә. Саҡ ҡына һаҡһыҙлыҡты оноттоңмо, сатнап, ярылып, һынып бара. Тап шуның кеүек, ҡурай хаҡындағы һүҙ ҙә уның үләне менән эш иткәндәй һаҡсыл, аяулы мөнәсәбәт талап итә.

**▸ Көйөргәҙе районында үткән ҡурайсылар йыйынында ҡатнашҡандан һуң тыуған тәүге тәьҫораттарығыҙ һеҙҙең ниндәй булды? Был сара башҡа ҡурай байрамдарынан ни яғы менән айырылды тип уйлайһығыҙ?**

**М. Вахитов:** Сәнғәт институтында уҡығанда "Башҡарыу оҫталығы" дәресендә төрлө төбәктәрҙәге ҡурайсыларҙы, йырсыларҙы, фольклорсыларҙы өйрәндек. Шул саҡта мин үҙем тыуып үҫкән Көйөргәҙе яғынан сыҡҡан ҡурайсылар хаҡында мәғлүмәт бик аҙ булыуына аптырай торғайным. Хәҙер быға аптырамайым, сөнки 1812 йылғы Ватан һуғышының 100 йыллығын да ҡурайсылар ошо төбәктә билдәләгән икән, тимәк, был да юҡҡа ғына булмаған. Юлай Ғәйнетдинов, Айрат Ҡобағошов ағайҙар әйтеүенсә, элек-электән бындай моң бәйгеләре, ҡурайсылар йыйындары традициялары ныҡ һаҡланған, ажар ҡурайсылар йәшәгән төбәктәрҙә генә үткәрелеп килгән. Көйөргәҙегә ҡурай ят төшөнсә түгел. Буранбай сәсән беҙҙең яҡҡа килгәндә уның артынан йөрөүсе ҡурайсы Ғәҙебәк Насирҙың да исеме тарихҡа яҙылып ҡалған. Башҡа төбәктәр йыш ҡына ҡурайсылар һәм йырсылар конкурстары үткәреп килһә лә, йөҙ йылға бер тапҡыр үтә торған сараның ошо ерлектә уҙыуы айырыуса әһәмиәткә эйәләр, тип уйлайым. Был йыйынға ҡурайсылар ярышыр өсөн түгел, 1812 йылда Ватан һуғышында ҡатнашҡан атай-олатайҙарыбыҙҙың рухына тоғро булғаны өсөн килде.

**В. Йылҡыбаев:** 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле башҡорт халыҡ йырҙарының күп булыуы һәм уларҙағы рух сағылышы атай-олатайҙарыбыҙҙың ниндәй патриотик рух менән унда ҡатнашыуы хаҡында һөйләй. Яуға улар ҙур рухи күтәренкелек, заманса итеп әйтһәк, психо-эмоциональ кисереш менән барған. Шулай булмаһа, шундайын аҫыл йырҙар ҙа тыумаҫ ине. Бөгөн килеп, теүәл 200 йылдан һуң, беҙ уларҙың вариҫтары ошолай йыйылышып ҡурайсылар йыйыны үткәрә алабыҙ икән, был да күп нәмә хаҡында һөйләй. Йыйындың Көйөргәҙе ерендә үтеүе лә бик урынлы. Йыйында үткән концерттың формаһы ла бик яҡшылап, төптән уйлап төҙөлгәйне. Сара барлыҡ ҡурайсылар башҡарыуында халҡыбыҙҙың гимны "Урал" көйөнән башланды. Артабан Абдулла Солтанов башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙары "Ирәмәле", "Эскадрон", сәнғәт академияһы ҡурайсылар ансамбле башҡарыуындағы "Кутузов", "Наполеон Бонапарт" көйҙәре яңғыраны. Сараның ошондай рухи юғарылыҡта башланыуы аҙаҡҡаса дауам итте.

**▸ 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле йырҙар, көйҙәр барыһы ла уникаль ҡомартҡы, улар араһынан иң ныҡ уйландырғаны "Наполеон Бонапарт" көйөлөр тип уйланыла. Ярай, Кутузов рус ғәскәре башлығы, Ҡаһым түрә үҙебеҙҙең батыр һәм уларға һоҡланып йыр ҙа яҙырға була, ә бына төп дошман һаналған, етмәһә, һуңынан әсир ителеп, меҫкен рәүешендә утрауға һөрөлгән Наполеон хаҡында шундай мәшһүр көй яҙылыуын нисек аңлатырға була һуң? Быға тиклем бит башҡорттар үҙҙәренең ҡан дошманы хаҡында "Тәфтиләү" һымаҡ ҡарғыш йырҙары ғына сығарғанын беләбеҙ.**



**М. Вахитов:** Ҡайһы осраҡта полк яҡшы һанала? Әгәр ҙә уның командиры яҡшы ойоштороусы булып, һалдаттары уның фарманын үтәргә әҙер торһа. Француз һалдаттары менән йөҙмә-йөҙ алышҡанда, уларҙың һуғышыу оҫталығына ҡарап, башҡорттар Наполеондың ниндәй ғәскәр башлығы булыуын аңлаған да инде. Шуға күрә лә был осраҡта улар Наполеондың хәрби оҫталығына һоҡланып, ошо көйҙө сығарғандыр, тием. Был көйҙә Наполеонға шәхес, антагонист, дошман булараҡ түгел, оҫта хәрби башлыҡ, стратег булараҡ баһа бирелә.

**В. Йылҡыбаев:** Бик урынлы мәсьәлә күтәрелә. Был турала мин дә инде нисәнсе йыл уйланып йөрөйөм. Был көйҙө Юлай ағай Ғәйнетдинов Хәйбулла районы Һаҡмар Бүреһе ауылынан Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев олатайҙан яҙып ала. Был йырға, яуға барған башҡорт батырҙарының рухы сағыла, тигән аңлатма ла бирелә. Әгәр ҙә көйҙөң йөкмәткеһе ошолай булып та, исеме ни өсөн "Наполеон Бонапарт" тип атала икән, тип тә уйландым. Наполеон Бонапарт оло ғәскәр башлығы, ғәҙәти булмаған шәхес. Донъя, Европа кимәлендәге мәшһүр рәссамдар уға бағышлап картиналар яҙған, Людвиг ван Бетховен уға арнап симфониялар ижад иткән икән, ул, беҙҙең ил позицияһынан ҡарағанса, илбаҫар, тиран ғына булмаған тип уйланыла бында. Тимәк, башҡорттар Бонапарттың башҡа сифаттары хаҡында ла хәбәрҙар булған һәм уға үҙ баһаһын биргән. Кемдер был фекерҙәр менән килешмәҫ тә, әммә шундай шәхескә ҡарата шундайын көй яҙылған икән, был һис тә юҡтан ғына түгел.

**М. Вахитов:** Был көй менән шундай шәхескә тарихи баһа ла бирелгән, минеңсә. Йәлләд Тевкелев та "Тәфтиләү" йыры аша мәңгелек тарихи баһаһын алған. Шул уҡ Наполеон шәхесенә ҡарата донъяның башҡа урындарында, Европала, Америкала төрлөсә ҡарашлы дәүләттәр, кешеләр йәшәй. Ҡыҫҡаһы, халҡыбыҙ кемдең кем икәнен бик яҡшы белгән, үҙенә ҡаршы яҡта тороусыларҙың да ыңғай сифаттарын күрә белгән. Иң тәүҙә, әлбиттә, хәрби кеше булараҡ баһаланған.

**▸ Әлбиттә, был һүҙҙәр Наполеонды аҡлау, яҡлау маҡсатынан әйтелмәй. Шул уҡ ваҡытта Мәскәүҙе яндырған, күпме урыҫ һалдаттарын, башҡорт яугирҙәрен үлтергән Наполеонға ла Тевкелевкә сығарғандай ҡарғыш йыры бағышларға мөмкин булыр ине. Икенсенән, Наполеон ҡулға алынғандан һуң, уны үлтермәйенсә, Изге Елена утрауына һөргөнгә ебәреү ҙә уның шәхесенең әле тарих асып бөтмәгән яҡтары барлығы хаҡында һөйләй. Тимәк, Наполеондың әлегәсә тарихсылар баһалап бөтмәгән яғын башҡорттар шул ваҡытта уҡ күргән, белгән тип иҫәпләргә лә булалыр бында. Тимәк, беҙ үҙебеҙҙең халыҡ йырҙары аша ғына ла Рәсәй, донъя, башҡорт тарихына яңыса күҙлектән ҡарай алабыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, ул йырҙар кем тарафынан яҙылды, ниндәйерәк шарттарҙа тыуҙы икән?**

**В. Йылҡыбаев:** Мәҫәлән, "Аллаяр батыр" көйө. Сәйфулла Дилмөхәмәтов һөйләүе буйынса, француз яуында ҡатнашыусы Аллаяр батырҙы дошманға психик атака яһау маҡсатында нуҡталап алып барғандар. Шундай уҡ инструменталь көйҙәрҙең береһе - "Ҡалмантай". Уның Туҡ буйындағы Үрге Ильяс ауылынан икәнлеген Юлай ағай Ғәйнетдинов архив материалдарына таянып асыҡланы. Башҡорт батыры хаҡындағы был көйҙө беҙгә Сергей Рыбаков алып килеп еткергән. Һәр хәлдә, һәр йырҙың ижад итеүсеһе, уға бәйле хәл-ваҡиғалар бар, уларҙың ҡайһы берҙәре билдәле, ҡайһы берҙәрен асыҡлайһы бар әле.

**▸ Ҡасандыр юғалыу сигенә барып еткән ҡурайыбыҙ, Аллаға шөкөр, халҡыбыҙға кире әйләнеп ҡайтты. Әле бына Көйөргәҙелә үткән йыйында ғына ике меңдән ашыу ҡурайсы ҡатнашҡан. Улар барыһы ла бөгөндән сәхнәгә сығып ажғыртып уйнай алыусы ҡурайсылар. Ҡурайсыларҙың күп булыуынан зыян юҡ, шул уҡ ваҡытта, минеңсә, улар араһында бер төрлө уйнаусылар күбәйҙе. Боронғо ҡурайсылар кеүек үҙенсәлекле башҡарыусыларҙың үтә аҙ булыуы нимәнән килә тип уйлайһығыҙ? Ғөмүмән, ҡурайҙа үҙенсәлек менән уйнауҙың асылы нимәлә ул?**

**М. Вахитов:** Элекке яҙмаларҙы тыңлаһаң, рух күтәренкелеге тойғолары кисерәһең. Әммә хәҙерге йәштәрҙең уйнауын тыңлаһаң, уларҙа башҡарыу оҫталығы камил булыуға ҡарамаҫтан, рухи күтәренкелек барыбер түбәнерәк. Бында, һис һүҙһеҙ, бар донъяны ялмаған глобалләшеү ҙә үҙ ролен уйнайҙыр. Беҙ көндән-көн тәбиғәттән алыҫлаша барабыҙ, был да ҡурайҙа сағыла тип әйтергә була. Дөрөҫ, бөгөн ҡурайҙа уйнаусылар күп, әммә ба-

*Элекке яҙмаларҙы тыңлаһаң, рух күтәренкелеге тойғолары кисерәһең. Әммә хәҙерге йәштәрҙең уйнауын тыңлаһаң, уларҙа башҡарыу оҫталығы камил булыуға ҡарамаҫтан, рухи күтәренкелек барыбер түбәнерәк. Бында, һис һүҙһеҙ, бар донъяны ялмаған глобалләшеү ҙә үҙ ролен уйнайҙыр. Беҙ көндән-көн тәбиғәттән алыҫлаша барабыҙ, был да ҡурайҙа сағыла тип әйтергә була. Дөрөҫ, бөгөн ҡурайҙа уйнаусылар күп, әммә барыһы ла үҙенсәлекле итеп башҡарыу оҫталығына эйә булмаһа ла, уларҙың күплегенән зыян юҡ, тип уйлайым. Сөнки улар үҙ күңеленә ҡурай моңон һалып ҡуя икән, ҡулына бер тапҡыр ҡурай ала икән, улар ҡурайҙы бер ваҡытта ла ташламай. Ҡурайҙы ғына түгел, ундайҙар бер ваҡытта милли рухынан тайпылмай ғүмер һөрә. Бынығы, бәлки, мөһимерәктер ҙә, сөнки ҡурай менән башҡорт милли рухы икеһе бер үк төшөнсәне аңлата.*

***✓ Хәҙер беҙ шундай шаулы заманда йәшәйбеҙ, хатта баштағы уйҙарҙы бер системаға һала алмай бер булабыҙ. Ҡурай менән дөңгөр беҙгә күңелде таҙартырға, баштағы юҡ-бар уйҙарҙы алып ташларға һәм таҙарынырға ярҙам итә.***

рыһы ла үҙенсәлекле итеп башҡарыу оҫталығына эйә булмаһа ла, уларҙың күплегенән зыян юҡ, тип уйлайым. Сөнки улар үҙ күңеленә ҡурай моңон һалып ҡуя икән, ҡулына бер тапҡыр ҡурай ала икән, улар ҡурайҙы бер ваҡытта ла ташламай. Ҡурайҙы ғына түгел, ундайҙар бер ваҡытта ла милли рухынан тайпылмай ғүмер һөрә. Быныһы, бәлки, мөһимерәктер ҙә, сөнки ҡурай менән башҡорт милли рухы икеһе бер үк төшөнсәне аңлата.

Дөрөҫ әйтәһегеҙ, бөгөн бер төрлө итеп уйнаусылар ныҡ күп. Ҡурайсылар конкурсында ҡатнашыусылар өсөн мотлаҡ белергә тейешле 20 көй барлыҡҡа килгәс, мин уларҙың бер төрлөлөктән ҡотола барыуына иғтибар иткәйнем. Тимәк, ҡурайсы үҙенсәлекле итеп башҡарыуға тик үҙ өҫтөндә даими ижади эшләп кенә өлгәшә, тигәнде аңлатты был яңылыҡ. Шул саҡта мәрхүм Зыя ағай Хәлилов: "Әһә, өмөтлө унлап егет барлыҡҡа килде", - тип әйтеп ҡуйғайны.

ҡайһы төбәктә сыҡҡанын һәм кемдәр башҡарғанын билдәләргә була.

**В. Йылҡыбаев:** Дим буйында сыҡҡан йырҙарҙы һәм көйҙәрҙе тыңлағанда ипле, һәлмәк кенә ағып ятҡан Дим йылғаһының ағышын тыңлағандай, ҡарап торғандай булаһың. Ҡыҫҡаһы, элек ерлек, бер-берендән өйрәнеү һәм традицияларҙы дауам итеү ҡурайсыны ҡурайсы итеп тәрбиәләгән. Бөгөн килеп академизм ҡурайсыларҙы бер стандартҡа, ҡалыпҡа һалды. Әммә һуңғы йылдарҙа академияның традицион музыка башҡарыу кафедраһы асылыу менән ҡурайсыға юғары белем алыуға юл асылыуы ла һөйөнөслө. Үткән быуаттағы фольклор яҙмалар барыһы ла беҙҙең кафедрала һаҡлана. Шул яҙмаларға нигеҙләнеп, һәр төбәктең уйнау алымдарын, традицияларын өйрәнәбеҙ. Һуңғы ваҡытта ҡурайсыларҙың үҙҙәренә генә хас йөҙө, репертуары килеп сыға башланы икән, беҙ нән бергә академизмды ҡуша алыр, тип фараз итәм.

**В. Йылҡыбаев:** Ҡурай бөгөн сәнғәт академияһында уҡытыла. Хәҙер оркестр составында ҡурайҙың айырым төркөмө лә бар. Ҡурай беҙҙең симфоник оркестрҙа башҡа төрлө музыка ҡоралдары менән яңғырай. Тимәк, беҙ ҡурайҙы юғары уҡыу стандарттарына яраҡлаштырып уҡытабыҙ икән, академизмдан бер нисек тә ҡаса алмайбыҙ. Әлбиттә, ата-бабаларыбыҙҙың традицион уйнау алымдары беҙҙең тейелгеһеҙ, иң беренсе урында тора. Шул уҡ ваҡытта ҡурайҙа оркестр, ансамблдәр составында, фортепиано менән уйнау мотлаҡ булырға тейеш. Әгәр ҙә ошо шарттар үтәлмәһә, беҙ ҡурайҙы юғары уҡыу йортонда уҡыта алмайбыҙ.

**▸ Роберт Юлдашевтың һуңғы концертының береһендә булдым. Унда тамашасыларҙың ярты залдан күберәге башҡа милләт вәкилдәре өс сәғәткә яҡын барған концертты бер тынала ҡабул итте. Ә бит беҙҙең ҡурайсадының ҡануны шулай:** тауарҙы оҫта итеп яһау бер нәмә, әммә уны һата ла белергә кәрәк. Бында һүҙ ҡурай концерттарына тамашасыны күберәк йәлеп итеү, ҡурайҙы киңерәк майҙанға сығарыу хаҡында бара.

**В. Йылҡыбаев:** Роберт Юлдашев хәҙерге заман тыңлаусыһына асҡыс таба белде. Уны хатта бик ҡулай маркетинг ысул тип тә атарға була. Ул быға туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәр аша килде. Әгәр ҙә башҡа милләт вәкилдәре иҫе китеп ҡурайҙы тыңлап, башҡорт сәнғәтенә иғтибар итә башланы икән, беҙ Робертҡа рәхмәтле генә булырға тейешбеҙ.

**▸ Роберттың уңышының нигеҙендә иң боронғо уйын ҡоралдары булған ҡурай менән дөңгөрбарабанды бергә ҡушыу ҙа яталыр. Тимәк, милләтенә ҡарамайынса, был ике уйын ҡоралы тауышы һәр кемдең аҫҡы аңында йәшәй...**

**М. Вахитов:** Бик дөрөҫ фекер. Хәҙер беҙ шундай шаулы заманда

**шатлыҡ тойғоһо кисереү асылы элеккесә үҙгәрешһеҙ ҡалһа ла, ни өсөн хәҙер элеккеләй мәшһүр йырҙар тыумай, тип уйлайһығыҙ? Быны бит йыр сәнғәтенең түбән төшөүе тип кенә баһаларға була.**

**М. Вахитов:** Элек йырҙар кеше күңелендә үҙенән-үҙе тәбиғи рәүештә тыуған. Уларҙы сығарған кеше йыр сығарыуҙы һәм уның өсөн, әйтәйек, гонорар алыуҙы үҙенең маҡсаты итеп ҡуймаған.

**В. Йылҡыбаев:** Элек йыр сығарыусы кешенең күңел кисереше ҡайһы урында юғары нөктәне алһа, уның күңелендә тыуған йыр шул кульминация нотанан башланған. Миҫалға "Төйәләҫ" йырын алайыҡ. Унда беҙ тыныс ҡына ағып ятҡан йылғаның тауышын ишетәбеҙ. Ә инде "Ҡарат" йырының тәбиғәте бөтөнләй икенселәй. Әгәр ҙә йөҙ егерме башҡорттоң яҙмышы ошо бер Ҡаратҡа бәйле икән, уның тәүге нотаһы юғары булғанлығы аңлашыла. Был осраҡта кешенең

# ЯҺАЛМА МОҢ ТҮГЕЛ...

## энергия сығанағы кәрәк

Теманан саҡ ҡына ситләшеп, бер нәмә хаҡында әйтеп үткем килә. Бөгөн мин дәүләт учреждениеларының береһендә эшләйем. Минең хужа булған кеше һуңғы күҙәнәгенә тиклем юрист, белеме буйынса физик, элек эске эштәр органдарында эшләгән отставкалағы полковник. Ул ҡурай тауышын ишетте лә, уға ғашиҡ булды. Ул үҙенең медицина фәндәре докторы булған дуҫы менән шундай тәжрибә лә үткәргән: кешене пирамида эргәһенә ҡуйып, ҡурай тауышы ебәреп ҡарағандар. Дауалау һөҙөмтәһе башҡа дауа төрҙәренән өс-дүрт тапҡырға юғарыраҡ килеп сыҡҡан.

**В. Йылҡыбаев:** Ҡурайҙың академик йүнәлештә уҡытылыуы ла бер төрлөлөккә килтерәлер, тип уйлайым. Хәҙерге ваҡытта музыка мәктәптәрендә, училищела, академияла ҡурай берҙәм стандарт буйынса уҡытыла. Ҡурайҙың тауышын сығарыу, тын алыу алымдары ла бер төрлө. Икенсенән,элекке яҙмаларҙа ҡурайсылар үҙ ерлегенә генә хас үҙенсәлек менән башҡара. Йомабай Иҫәнбаев, Солтанморат Насиров, Ишҡәле Дилмөхәмәтов, Сәғәҙәт Бараков кеүек ҡурайсыларҙың үҙ репертуары, үҙ интонацияһы, үҙ уйнау алымдары булған. Әгәр ҙә түңгәүер ҡурайсылары марш, инструменталь көйҙәрҙе башҡарыуға маһир булһа, Баймаҡ төбәге ҡурайсылары күберәген халыҡ йырҙарын ҡурайҙа уйнаған. Уларҙа Ғата Сөләймәнов, Хәмит Әхмәтов, Кәрим Дияровтар бер ҡаҙанда ҡайнап йәшәгән. Белорет ҡурайсыларын алһаҡ, уларҙың үҙҙәренә генә хас репертуары булған. Әйтәйек, "Ҡағы ташы", "Ямантау" көйҙәре тик уларҙың ерлегенә генә хас.

**М. Вахитов:** Көйҙө тыңлағанда интонацияларға ғына ҡарап та, быны шул эштең башланғысы, һөҙөмтәһе тип әйтә алабыҙ.

**М. Вахитов:** Ҡурай тарихының өс этабы бар, минеңсә. Халыҡ традициялары нигеҙендә үҫешкән ҡурайсылар 1-се этапты тәшкил итһә, бөгөнгө этап аралыҡты тәшкил итеүсе күсеү этабылыр. Беҙ хәҙер тулыһынса халыҡ традициялары буйынса ла уҡый алмайбыҙ, сөнки халыҡ традицияларын үҙендә йөрөтөүселәр һәм башҡаларға тапшырыусылар ҙа һирәгәйә. Шул уҡ ваҡытта тулыһынса академизмға ла күсмәгәнбеҙ. Академизмдың кәрәклеге көн кеүек асыҡ, сөнки хәҙерге ваҡытта халыҡ сәнғәтен һаҡлап ҡалыр өсөн ҡурай классик уйын ҡоралдары рәтенә инергә тейеш. Бер үк ваҡытта халыҡ көйҙәренең традицион башҡарылыштағы формаһы һаҡланыуы ла фарыз, шуның менән бер рәттән, беҙгә ҡурайҙың академик яңғырашын да булдырыу кәрәк. Ҡурайҙың мөмкинлектәре шул тиклем күп һәм ул донъяның башҡа уйын ҡоралдары менән органик рәүештә яңғырай ала. Быны беҙҙең Роберт Юлдашев бик оҫта ҡуллана һәм бар донъяға ҡурайҙы күрһәтеп йөрөй. Беҙ әлеге ана шул ике этап араһында. Өсөнсө этап ҡурайсылары, моғайын, үҙендә боронғо традициялар ме-

**сылар араһында Роберттан да оҫтараҡ уйнаусылар бар. Һеҙ уның уңышының серен нимәлә күрәһегеҙ?**

**М. Вахитов:** Бында бер Роберттың ҡурайы ғына яңғырамай бит. Бында ҡурай башҡа музыка ҡоралдары менән "кейендерелә". Бында башҡа милләт тамашасылары ҡурайҙа башҡорт халыҡ йырҙарының төбөнә төшөп башҡарылыуын түгел, башҡа музыка ҡоралдары йәнәшлегендә айырым фрагменттарҙы ғына ҡабул итә. Әйтәйек, был сығыш ваҡытында башҡа милләт кешеһе, "Уралым" йыры нишләп минең күңелгә инергә тейеш әле, тип уйланып ултыра алмай. Роберттың концерттарында хәҙерге заман тамашасыһы ихтыяжы өсөн "сәйнәп ҡаптырылған" музыка тәҡдим ителә. Элекке ҡурай концерттарының бөгөн ни өсөн уңышлы була алмауында ла алымдарҙың иҫкереүен сәбәп итеп килтерергә булалыр. Мәҫәлән, шул уҡ тик ҡурайҙан ғына торған концертты тематик яҡтан ниндәйҙер яҡҡа борорға мөмкин бит. Әйтәйек, шартлы рәүештә бер йүнәлеш алайыҡ - "Ҡурайтерапия".

**▸ Ҡурай концерттарының үҙенең заманса зауыҡлы махсус продюсерҙары кәрәк, тип әйтмәксеһегеҙме?**

**М. Вахитов:** Тап шулай, ундай продюсерҙар кәрәк. Баҙар иҡти-

йәшәйбеҙ, хатта баштағы уйҙарҙы бер системаға һала алмай бер булабыҙ. Ҡурай менән дөңгөр беҙгә күңелде таҙартырға, баштағы юҡ-бар уйҙарҙы алып ташларға һәм таҙарынырға ярҙам итә.



**В. Йылҡыбаев:** Һәр замандың үҙ ритмы бар. Хәҙерге кеше бөгөн - бында, иртәгә - Мәскәүҙә, унан Вашингтонда икән, уның ритмын һуҡма музыка ҡоралдары сағылдырыуға һәләтле. Роберттың ана шул ритмды ҡурайға ҡушып бирә белеүе - уңышының серелер, тием.

**М. Вахитов:** Кеше бөгөн яһалмалыҡтан ныҡ арыны, уға ҡурай моңо кеүек тәбиғи энергия сығанағы кәрәк.

**▸ Музыканы яҙыуҙың, башҡарыуҙың иң камил мөмкинлектәре булған быуатта йәшәһәк тә, әҙәм балаһының ҡайғырыу,**

эмоциональ кисереше бөтөнләйгә икенсе. Быны ошондай эмоциональ кисерештә тыуған йырҙар мәңгелек. Ә хәҙерге заман композиторы йыр яҙғанда шундай тойғолар кисерәме һуң? Әгәр ҙә юҡ икән, тимәк, ул йыр оҙаҡ йәшәй алмай. Оҙаҡ йәшәмәгәс, халыҡтыҡы ла була алмай.

**▸ Тик ысын кисереш, тере тойғо ғына йырҙы тере итә ала инде, улайһа...**

**В. Йылҡыбаев:** Нәҡ шулай. Киреһенсә булған осраҡта, ундай йыр икенсе көнөнә үк онотола.

**М. Вахитов:** Әгәр ҙә кеше күңел һәм йөрәк менән эш итмәһә, ул йырсы йә композитор ғына түгел, хатта кеше лә түгел бит. Беҙҙе хистәр, тойғолар кеше итә. Мин ҡайһы бер концерттарҙа йырсыны тыңлап ултырам. Бик шәп йырлай ул, тауышы ла бынамын тигән итеп ҡуйылған, әммә мин уға ышанмайым...

***1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле башҡорт халыҡ йырҙарының күп булыуы һәм уларҙағы рух сағылышы атай-олатайҙарыбыҙҙың ниндәй патриотик рух менән унда ҡатнашыуы хаҡында һөйләй. Яуға улар ҙур рухи күтәренкелек, заманса итеп әйтһәк, психо-эмоциональ кисереш менән барған. Шулай булмаһа, шундайын аҫыл йырҙар ҙа тыумаҫ ине. Бөгөн килеп, теүәл 200 йылдан һуң, беҙ уларҙың вариҫтары ошолай йыйылышып ҡурайсылар йыйыны үткәрә алабыҙ икән, был да күп нәмә хаҡында һөйләй. Йыйындың Көйөргәҙе ерендә үтеүе лә бик урынлы. Йыйында үткән концерттың формаһы ла бик яҡшылап, төптән уйлап төҙөлгәйне. Сара барлыҡ ҡурайсылар башҡарыуында халҡыбыҙҙың гимны "Урал" көйөнән башланды.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Көйөргәҙе районында үткән ҡурайсылар йыйыны, ҡурай хаҡында башланған әңгәмәбеҙ үҙенән-үҙе милләт яҙмышы хаҡында һөйләшеүгә барып ялғанды. Шулай булырға тейештер ҙә. Юлай Ғәйнетдновтың китабында Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең ҡурай хаҡында әйткән мәшһүр һүҙҙәре килтерелгән: "Ҡурай - башҡорттоң сәнғәттәге даһилығы, уның милли милке һәм хазинаһы, ҡурай - ябайлыҡтың бөйөклөгө". Ҡурай моңон тәрәндән аңлаған һәм башҡорт халҡының тарихын, рухиәтен төптән белгән һәм тойған кешенең һүҙҙәре был. Башҡорт менән ҡурай - икеһе бер. Шуға күрә лә башҡортто ҡурайһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмайҙыр.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Үсәргәндең ҡаны урғый һиндә,*
*Миндә ярһып аға бөрйән ҡаны.*

*Мәңгелеккә айырылмаҫ, тиҙәр*
*Һыуын эскәндәрҙе бер йылғаның.*





*Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ*

# Ысыным

## Поэма

*Фәйрүзәгә*

Бармы донъя хыял аръяғында,
Буламы һуң уйҙың осон табып?
Хыялыйҙар булып бөткәс кенә,
Асылымды өттө ысынбарлыҡ.

Өмөттәрҙе сөңгөлдәргә күмеп,
Хыялдарға таҡҡас "ясин-ярлыҡ",-
Таңғы ҡояш булып балҡыны ла,
Асылымды үпте ысынбарлыҡ.
(Хасилымды упты ысынбарлыҡ,
Фасылымды йотто ысынбарлыҡ).

Ысынбарлыҡ,
Ысын барһың икән,
Хыял иңләп күрелмәгән хозур.
Һине күрә тәүәккәлдәр генә,
Барлығыңды тоя бары ғорур.

Ысынбарлыҡ,
Һинең күҙҙәреңә
Ҡарап була тик тураға ғына.
Ҡараштарын ситкә күсерә тик
Ялған менән тик юрамал ғына.

Ысынбарлыҡ,
Һин һөйәркә түгел,
Әрһеҙ хисле һин һөйәр ҙә түгел.
Ысын менән бушты айырмай тик
Ялған хисле тик "һөйәркә күнел".

Ысынбарлыҡ,
Эсең зар ҙа икән,
Беҙҙеме һин көтөп илауланың?
Юҡ, беҙ бында иртәрәк тә түгел
Һәм һунлап та һиңә кил(ә)алманыҡ.

Белмәһәк тә ҡасан осрашырҙы,
Барлығыңды белдек, онотманыҡ.
Ҡәҙере юҡ еңел табылғандың,
Ҡаршылыҡтар үтеп, оҙаҡланыҡ.

Оҙаҡ көттөм...
Тәүҙә тыуыр мәлен,
Әллә ниңә ваҡыт һиңырланы...
Ут етенсе йәйем еткән мәлдә
Йөрәгемдең тойҙом ҡыңғырауын.

Асылыма сыйылды ла сыңы,
Яңғыратты барлыҡ булмышымды.
Ысынымды тапты мәшһүр әсә,
Ысынбарлығыма моң ҡушылды.

Ысынымды тапты мәшһүр әсә,
Мин юғалттым күнел тыныслығын.
Кем уйлаған, берәү тыуған саҡта
Икенсенең йәне тыпырсыныр...

Юлдарыбыҙ әгәр киҫешмәһә,
Ысынбарлыҡ яңылышыр ине.
Мендельсонды уйнап, никах уҡып,
Ялған менән "яҙылышыр" инек.

Үтер ине шулай ғүмеребеҙ,
Яҙмыш шулай булды, тип алданып.
Тик нисек һуң беҙ күтәрер инек
Хыялдағы сабый илауҙарын?
(Төштәремдә күрҙем ҡыҙ баланы).

Хыялымда һәр саҡ сың-сың килеп,
Ысынбарлығымды һағындырҙың.
Һәр көҙөмдә өмөттәрҙе күмеп,
Һәр яҙымда тағы ҡабындырҙың.

Һинең сыңға оҡшатырға теләп,
Ҡыңғыраны башҡа ҡыңғырауҙар.
Ҡушылдым да улар тауышына,
Әйләнеп тә бөттөм һаңғырауға.

Һәр берейһен, һин икәнһең, тиеп,
Һин килгәнһең икән, тиеп аңланым.
Әммә киттем, йәнем ишетмәгәс
Хыялдағы сабый илауҙарын...
(Төштәремдә күрҙем ҡыҙ баланы).

Сыңың ҡалды хыял аръяғында,
Үҙем ҡалдым хыял бирьяғында.
Үҙем һаман сың-сыңыңды көттөм,
Ҡасан, тиеп бында, ел ыңғайлар?

* * *

Эшем - эш түгел,
Эсем - эс түгел,
Иҫем - иҫ түгел,
Тышым - тыш түгел,
Ҡышым - ҡыш түгел,
Ашым - аш түгел,
Башым - баш түгел,
Ҡашым - ҡаш түгел,
Яҙым - яҙ түгел,
Наҙым - наҙ түгел,
Хисем - хис түгел,
Кисем - кис түгел,
Күсем - күс түгел,
Көсөм - көс түгел,
Өсөм - өс түгел,
Бишем - биш түгел,
Тешем - теш түгел,
Төшөм - төш түгел,
Төҫөм - төҫ түгел
ине...
-Килде, дуҫтар, миңә
СМС бөгөн -
Һөйөнсө!
Һөйөнсөгә нимә бирәһегеҙ?
-Тараҡан бото...
-Араҡы, ярты...
-Яраплан винты...
Дамир әйтте:
-Бер шампан инте...
-Кәрәкмәй бото, ярты, винты, инте,
Һөйөнсөһө - үҙемдән
Һөйөнөслө һүҙемдән...
Үҙем табып яйын,
Үткәрәм
Хискә иҫерер табын.
Шатлығымды күрәһегеҙме?
-Нимәне?
-Кемде?
-Нимә тип яҙған?
-Анһат кәрәк Дәлхәгә,
Тиеп әйткән Мәрхәбә.
Әйткән ти йөҙ мәртәбә,
Ҡулын терәп кәртәгә...
Шуға күрә әйтмәйем...
-Әйтмәһән, тор,
Моғайын, бер ҡыҙҙыр әле,
-Йә, һыҙғыр әле...
-Юҡ, һыҙғырмайым...
Йырлағым,
Илағым,
Уйнағым,
Тулағым,
Колағым,
Тағы ла әллә ниҙәр...
Ҡылғым килә.

Бейегем,
Эйелгем,
Йәйелгем,
Кәйелгем,
Кирелгем,
Тирелгем,
Үрелгем,
Тағы ла әллә ниҙәр...
Эшләгем килә.
Тормош-яҙмыш, шиғыр-мигыр
Ҡануңдарын емергем,
Әллә ҡайҙа...
Йүгергем килә.
Тешем тешкә теймәне,
Иҫем иҫкә килмәне,
Эсем эскә һыйманы,
Хисем хискә һыйманы,
Береһен дә тыйманым.
Иҫем китеп йылмайҙым,
Төшөм нурҙан балҡыны,
Төҫөм өттө ялҡыным,
Тик бер генә һүҙеңдән:
"Һағындым бит, ағыным!"
Хат килтерҙе СМС,
Ебәреүсе - Ысыным!
Хыялымдың аръяғынан -
Мин йәшәгән бирьяғына.

* * *

Һөйөү булып килде ысынбарлыҡ,
Алып килде сың-сың Ысынымды.
Ауалата итеп тултырҙы ул
Өңөрәйеп ҡалған бушлығымды.

Әсәкәйем тороп ултырҙы ла,
Китергә лә ятҡан түшәгенән:
"Балам, тине, Хоҙай ҡулы тейгән
Был балаҡай тыуып үҫкән ергә..."

Ошо булды миңә һуңғы һүҙе,
Биреп китте әммә фатихаһын.
Ул тапшырып китте икебеҙгә
Тик бәхетле булыу вазифаһын.

Өлкән апайыма нәҙер әйтеп,
Мине һиңә ул тапшырып китте.
Атайыма тағы ниҙер әйтеп,
Беҙҙең өсөн ул шатланып үтте.

* * *

Ысыным,
Йөрәгемде тыңла әле,
Йәнкәйемде тырна әле,
Һинһеҙлектән ҡысыны.
Күкрәгемдә тыпырсынып,
Йәшәйһең бит, Ысыным!

Ысыным,
Көлөүҙәрең сылтыратып
Асылымды сыңғыратты.
Арыныңмы, ҡошсоғом?
Ояң әҙер - минең йөрәк,
Ултырма һис бошоноп.

Ысыным,
Эҙләгәйнем хыялымдан,
Те яғымдан, бы яғымдан...
Йылдар үтте ашығып.
Һин үҙемдә йәшәгәнһең,
Асылымда йәшенеп.

Ысыным,
Нисек барһың, ҡабул итәм,
Нәфис түгел, документаль
Фильм беҙҙең ошолор.
Уйҙырмаға - юл ябылыр,
Хәҡиҡәткә - асылыр.
Ысыным,
Өркһән беҙҙән яһалмалыҡ,
Беҙ ялғандан яһалманыҡ.
Беҙ - ихласлыҡ асылы.
Килдем, еңеп яҙмышымды,
Йәнем һиңә асығып...

* * *

Исемендең яҡут хәрефтәрен
Тылсым-тиҫбеләргә теҙә-теҙә,
Доға итеп уны ҡабатлайым,
Аҫыл ҡашмауҙарға тегә-тегә.

Асылыңды асылымда тоям,
Булмышыңды тоям булмышымда.
Ҡайҙан икебеҙҙә бер үк фекер?
Минең өндәр килә тауышыңдан.

Исемемдең ябай мәғәнәһе
Төҫ булараҡ кейемемә ятҡан.
Танымайса үтеп китмәһен, тип,
Күҙ һалып бер ҡуймаһын,
тип, ятҡа...

Ҡыҙыл төҫтө шуға һайланыңмы?
Был хаҡта һин оҙаҡ уйланыңмы?
Ғәрәпсәнән "ҡыҙыл" "әхмәр" була,
Ҡыҙыл төҫтө шуға һайланыңмы?

Минең әсәй һинең фәйрүз төҫкә
Манып алған күҙем алмаларым.
Ҡарашымда, тимәк, йәшәгәнһең
Сәгер төҫөң менән тамғаланып...

Ҡайҙан икебеҙҙә бер үк хистәр,
Бер үк ынтылыштар, хаталар ҙа.
Никахлашыр мәлебеҙҙе тойоп,
Дин юлынан киткән атайҙар ҙа...

Үсәргәндең ҡаны урғый һиндә,
Миндә ярһып аға бөрйән ҡаны.
Мәңгелеккә айырылмаҫ, тиҙәр
Һыуын эскәндәрҙе бер йылғаның.

Әммә яҙмыш яҙлыҡтырмаҫ, тимә,
Әүерәтеп осһоҙ таҡмағына.
Күҙ һалырбыҙ шул саҡ һаҡмарыбыҙ
Сабыр ғына ағып ятҡанына,
(Бер йүнәлеш алып аҡҡанына).

* * *

Һиңә һулыш өргән өсөн,
Миңә алма өҙгән өсөн,
Рәхмәт атай-әсәйенә,
Йөҙ йыл улар йәшәһенә!

Ярай әле, сая атаң
Үҙ һүҙендә тора белгән.
Ярай әле, фәрештәнең
"Амин" һүҙе тура килгән.

Ярай әле, сабыр әсәң
Атайыңа ҡулын биргән.
Ярай әле, Хоҙай һине
Ҡыҙ мөһөрөн һуғып биргән.

Тыумай ҡалһаң, нишләр инем?
Терһәгемде тешләр инем.
Был донъяла һинһеҙлегем
Мосолмандың - динһеҙлеге.

Тәүҙә атай-әсәйеңдең
Хыялында йәшәгәнһең.
Ысынбарлыҡ тупһаһына
Тәпәй баҫып йәшнәгәнһең.

Сың-сың, ысын, Ысынҡайым,
Әйҙә, һине ышыҡлайым.
Бурандарҙан, янғындарҙан,
Ымһындырыр ялғандарҙан.

Сың-сың, ысын, Ысынҡайым,
Таңда баҙлар ысыҡҡайым.
Һине һөйөп өлгөрөргә
Етер микән был ғүмерҙәр?

Һин йәшәгән донъяларҙың
Бәхет икән һәр миҙгеле.
Һиндә тормош үҙе йәшәй,
Аңланым тик хәҙер килеп...

Һин йәшәгән донъяларҙың
Һөйөү икән доғалары.
Биҙәктәре нағыш икән,
Терәктәре намыҫ икән.

Һине бары була һөйөп,
Һин һөйөүҙең үҙе лә ул...
Үҙеңдә - нур, йөҙөңдә - нур,
Һүҙеңдә - нур, күҙеңдә - нур!

Сың-сың итеп бәхет сыңы
Һиндә сыңлай, Ысынҡайым!
Йәнкәйемде саҡ-саҡ тыям,
Китмәһен тип осопҡайы.

Хыялымдың аръяғында,
Бирьяғында булдың микән?
Һин донъяға мин булғанға,
Минең өсөн тыуҙың микән?

Һине тапҡан мәшһүр әсә
Күнелемдең әсәһе лә.
Йәм биреүсе, гәм биреүсе,
Ҡот биреүсе йәшәүемә.

Бөгөн һинең тыуған көнөң -
Күнелемдең тыуған көнө.
Әсәйеңдең тулғаҡ көнө,
Атайыңдың уңған көнө.

* * *

Саялығың атайыңдан күсһә,
Әсәйеңдән килә сабырлығың.
Ымһындырыр оло илаһилыҡ
Булмышыңда ҡалған сабыйлығың.

Башҡаларҙың хилафлығы өсөн
Үҙең оялырға белеүҙәрең,
Аҫтан киҫеүсене, монафиҡты
Ихласлығың менән еңеүҙәрең.

Ошо халәтеңде күрмәйенсә,
Үтеп китһәм, үҙем монафиҡтыр.
Белдем шуны: шуға яҙмышыңа
Илтер һуҡмаҡтарҙан юлға сыҡтым.

Ошо ғына ысын юлым минең,-
Гүйә барам үҙ-үҙемә табан.
Һиндә генә үҙ-үҙемде күрәм,
Һиндә генә үҙ-үҙемде табам.

Ысынымды, һине табыр өсөн,
Мендәр араһынан таныр өсөн,
Белер өсөн тормош тәжрибәһен,
Мең һынауҙар үтеп, әҙерләнеп...

Донъялыҡҡа мин иртәрәк килдем,
Сирканысты мин иртәрәк белдем.
Тормош һиңә хеҙмәт итһен өсөн,
Тик шатлыҡтар һине көтһөн өсөн.

Барыһына әҙер булыр өсөн
Мин иртәрәк күрҙем донъяларҙы.
Таҙартырға, юҡ итергә килдем
Һинең юлда ятҡан миналарҙы.

* * *

Хыялдағы сабый илауҙарын
Бармы икән әмәл йыуатырлыҡ?
О, ул илау, ғүмерҙәргә һыймай,
Мәңгелектең үҙен ҡуҙғатырлыҡ!

Ғүмер ахырында ул баланы
Күрергәме ейәнсәрең итеп?
Хыялдағы сабый илауҙарын
Тыңларғамы, ни йәндәрең етеп?

Минең дә бит бик күптәндән алып
Хыялымда ҡыҙым илағайны...
Йыуатырлыҡ әмәл булмағанға,
Өнһеҙ генә уны тыңлағайным.

Эй, иланы, минән ғүмер һорап,
Нисек итеп тыуырға ла белмәй...
Үҙ-үҙемдән ҡаса алмағанға,
Тыңланым ни ҡылырға ла белмәй.

Төштәремдә ҡыҙым иланы ла,
Таптырҙы ул минән әсәкәйен.
Хыялымды ысынбарлығыма
Әйләндерер гәзиз кешекәйен.

Тамсы һине үҙе һайлап алды
Мендәр, миллиондар араһынан.
Әсәлеккә иғлан итеп бәйге
Һәм йөкләмә биреп барыһына.

Бүләк итте Тамсы тәүге тапҡыр
Һиңә әсә булыу бәхетен дә.
Ә мин - атай, ҡыҙлы назлы атай
Атайлыҡтың күркәм тәхетендә.

Атай булмаҫ улым ҡыҙһыҙ, тиеп,
Юҡҡа ғына әйтмәгәндер берәү.
Ҡыҙҙар атайҙарҙың йыуанысы,
Ә малайҙар - әсәйҙәргә терәү.

Ике улды бирҙең, рәхмәт, Хоҙай,
Ике улым ике ҡулым кеүек.
Ғүмеремдең "Илле" болононда
Уйнап йөрөй ҡыҙым ҡолон кеүек.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ҠАРТ АҒАСЫҘ...

## урман урман булмай

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урыныҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Вәсилә ЯНЫБАЕВА, "Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы" директоры:** Тәбәгебеҙҙә урмандың ҡырылыуы ҙур экологик проблемалар менән янай. Урман - йәнлектәр, үҫемлектәр төйәге генә түгел, һыу тотҡаһы ла бит. Ағастарҙың тамыры насос кеүек һыуҙы өҫкә тартып тора, урман бөтһә, һыу аҫҡа китә. Йылғаларҙың ҡороуы, һыуҙың бысраныуы нигеҙҙә тап урман кәмеүенә бәйле. Бигерәк тә ылыҫлы урмандың күпләп ҡырҡылыуы борсой. Вирустарға ҡаршы торған ылыҫлы ағастарҙың кәмеүе төрлө ауырыуҙарҙың барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Уралда тәүге заводтар ҡалҡыу менән тау урмандары ҡырыла башлай. Әүжән заводында булып киткән Дмитрий Менделеев, тәбиғәтебеҙҙе күреп: "Уралда урмандың кәмеүенә һис ҡасан юл ҡуйырға ярамай, кире осраҡта экологик фажиғә буласаҡ", - тип әйтеп ҡалдыра.

Хәҙер беҙгә ашығыс рәүештә урман үҫтереүҙе киң йәйелдерергә кәрәк. Был мәсьәләгә экологтар ғына түгел, бөтә халыҡ тотонорға тейеш, балаларҙы ылыҡтырыу, өйрәтеү мөһим. Ә быны өсөн ведомство-ара программалар ҡабул итергә кәрәк. Шул ваҡытта экологтар, урмансылар ҙа, мәғариф хеҙмәткәрҙәре лә бер йүнәлештә эшләр ине. Республиканың күпселек өлөшөндә үҫкән ағастарҙы ысын мәғәнәһендә урман тип әйтеп булмай. Хәҙерге урман биләмәләрен боронғо башҡорт урмандары менән сағыштырырлыҡ та түгел. Ниндәй генә тереклек төрөн алып ҡарама - ғаилә кеүек, унда олоһо ла, урта йәштәгеһе, кесеһе лә булырға тейеш. Шунһыҙ, ғүмер дауам итмәй. Урманда ла йәш ағастар менән бергәололары үҫергә тейеш. Ә бөгөн кеше "посадка"ларҙы ла урман, ти. Тәбиғәт ҡурсаулығы эшмәкәрлегенең төп маҡсаттарының береһе тап шунда - ысын урманды һаҡлап ҡалыу, уның ниндәй булырға тейеш икәнен күрһәтеү.

Сит илдәрҙә хәҙер тәбиғи урманды тергеҙеү буйынса дәүләт программалары ҡабул итәләр. Боронғо ағас төрҙәрен үҫтерергә тырышалар. Әйтәйек, Польша урмандарын ваҡытында ситтән килтерелгән ағастар баҫып алғайны. Хәҙер унда шул ағастарҙы ҡул бысҡыһы менән ҡырҡып, үҙ тоҡомдарын тергеҙеп йөрөйҙәр. Беҙҙә ҡиммәтле тоҡом - ҡарағас ҡырылып бөттө. Ҡурсаулығыбыҙ был төрҙө үрсетеү өҫтөндә эшләй. Биләмәбеҙҙә йәш ҡарағастар үҫеп килә. Бер нисә йылдан улар нығынып китһә, беҙҙә ҡарағас урманы бар, тип ауыҙ тултырып әйтә аласаҡбыҙ. Әммә республиканың башҡа өлөштәрендә лә был эште башҡарырға кәрәк.

**Мөнир ИҠСАНОВ**
**яҙып алды.**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ ИР-АТ

# КЕШЕНЕКЕНӘ ҠАРА...



## тик үҙеңсә эшлә

**Һөнәрем буйынса комбайнер, тракторсы мин. Ваҡытында тимерсе, балта оҫтаһы булып та эшләргә тура килде. Әммә ағас эшенә, бигерәк тә ағастан яһалған ҡул эштәренә бала саҡта уҡ ҡыҙыҡһыныу тыуҙы. Ғөмүмән, бар һәләттәрем бала саҡта асылды һәм үҫте.**

### Һандыҡтан башланды...

Етенсе класта ҡул эштәренә мауығып киттем. Шул ваҡытта яһаған һандығым әле лә һаҡлана. Әсәйемдең: "Кейем-һалымды һалыр урыным юҡ, һандыҡ кәрәк, кемдән генә эшләтергә инде?" тип зарланғанын ишетә йөрөнөм дә, бер көндө мәктәптән ҡайттым да эшкә тотондом. Таҡта, атайҙан ҡалған хеҙмәт ҡоралдары бар ине. Атайым балта оҫтаһы булғайны. Донъянан иртәрәк китте. Шуға тәүге һандыҡты эшләгәндә әйтеп, өйрәтеп тороусы кеше булманы, ҡиәфәтенә килтереп, үҙем эшләнем. Шунан бирле ағастан төрлө әйберҙәр яһайым. Макеттар, сувенирҙарым күп. Яратҡан эштәремдең береһе - шәжәрә бишеге. Сәнгелдәкте һынландырған сувенир эшләп, унда үҙ шәжәрәмде уйып ҡуйҙым. Боронғолар имәндән һыу, бал өсөн тәгәйенләнгән мискәләр эшләр булған. Мин дә, ҡыҙыҡһынып, был оҫталыҡты үҙләштереп ҡараным. Тырыҙдан кәрзин, батман яһайым. Ситәндәр үрәм. Ун йыл элек уҙған район һабантуйында тирмәбеҙҙе ситән менән уратып ҡуйғайныҡ. Иң матур тирмә беҙҙеке булып сыҡты. Эшләгән әйберҙәрҙе үҙем хужалыҡта ҡулланам. Күбеһен бүләккә бирәм. Һатып алырға теләүселәр ҙә күп. Тик бөгөн материал табыуы ҡыйынлыраҡ, ҡиммәткә төшә. Урмандан киҫеп алып ҡайтып, пилорамала таҡтаға ярҙырып киптергәнсе, кәмендә йыл ярым ваҡыт үтеп китә.

### Гармун да - дуҫым

Әлеге көндә бына тиҫтә йылға яҡын үҙ ауылымдың мәҙәниәт йортонда "Һыйы" фольклор ансамбленең художество етәксеһе булып эшләйем. Клубта эшләгәс ни, гармунсы, йырсы, бейеүсе булырға ла тура килә. Сөнки гармунда уйнаусылар аҙ хәҙер ауылда, белгәндәренең иһә теләге-дәрте етмәй. Сәнғәткә ҡарата һөйөү ҙә бала саҡтан килә. Өсөнсө класта уҡығанда Сәрлетамаҡта ташсы һөнәрен үҙләштереп йөрөгән ағайыма "Гармун алып ҡайт, гармунда уйнарға теләйем", тип үтенгәнмен. Ағай беренсе эш хаҡынан 35 һумға гармун алып ҡайтты. Мәктәптән ҡайтам да, ашап та тороу юҡ, гармунға тотонам. Ултырғысҡа ҡуйып, гармун тирәләй әйләнә-әйләнә, уны тартҡылай-тартҡылай өйрәнәм. Был һөнәргә лә мине бер кем дә өйрәтмәне.

Кеше барыһын үҙаллы үҙләштерергә тейеш, тигән фекерҙәмен мин. Теләгең генә булһын, шул саҡта бөтәһе лә килеп сыға. Әрме йәшендә булған улыма ла бер ни ҙә өйрәтеп маташмайым. Әгәр теләһәң, бер нимә лә ҡаршы килмәй, гармунда уйнарға ла, ҡул эштәренә лә үҙең өйрәнәсәкһең, тим уға. Йыр ижад иткәнем дә бар. Йәш саҡта шуның менән бәйле ҡыҙыҡ ҡына ваҡиғалар ҙа булды. Әрмелә хеҙмәт иткән ауылдаш дуҫым хеҙмәттәштәренә минең йырҙарҙы йырлап ишеттергән. Шул йырҙарҙы ҡаҙаҡтар отоп алып, йырлап йөрөр булған. Буласаҡ хәләл ефетемә бағышлап сығарылған йырым да уның йөрәген яуларға ярҙам итте.

Форсат килеп сыҡһа, һүрәт төшөрәм. Тәүге һүрәтем Ленин бабайҙың портреты ине. Мәктәптә көләм тотҡанымды белеп ҡалғастар, стена гәзитенең мөхәррире итеп ҡуйҙылар. Был һәләтем ҡыҙҙарыма ла күскән. Береһе художник-дизайнер булып эшләй хәҙер.

Ниндәй генә эшкә тотонһам да, минең эштәрем бер кемдекенә лә оҡшап торорға тейеш түгел, тигән уй менән башҡарам. Һәр башҡарған эшең яңылыҡ булһын, ҡыҙыҡһынһындар, һоҡланһындар, тим. Башҡаларға ла шул һүҙҙәрҙе әйтәм. Кешенекенә ҡара һин, ләкин икенсе төрлө, үҙеңсә эшлә.

**Урал ШӘРИПҠОЛОВ.**
**Ҡырмыҫҡалы районы**
**Шәрипҡол ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# АҘНАНЫҢ...

## дүртенсе көнө ауыр

■ Органик йәшелсәләрҙә насар химик компонентар булмауын беләбеҙ. Хәҙер ғалимдар ябай ысул менән үҫтерелгән йәшелсәләргә ҡарағанда уларҙың тәбиғи антиоксиданттарға байыраҡ икәнлеген асыҡлаған. Барселона университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, органик томаттарҙан яһалған һут һәм кетчупта полифенолдар күберәк. Полифенол - антиоксидант матдәләре, йәшелсәләрҙең тышҡы тәьҫирҙән тәбиғи һаҡланыу ысулы. Һуңғы осорҙа күп тикшеренеүҙәр антиоксиданттарҙың ҡартайыу процесын тиҙләтеүсе ирекле радикалдарҙы зарарһыҙландырыу һәләтен асыҡлағайны инде. Күп кенә киң билдәле биологик әүҙем өҫтәмәләр тап полифенол нигеҙендә яһала. Әммә ғалимдар капсула йәки таблеткаға ҡарағанда, тәбиғи продукттар кеше организмы өсөн файҙалыраҡ, тип раҫлай.

■ Ковентри (АҠШ) университеты ғалимдары кофеиндың тағы бер файҙалы яғын асыҡлаған. Самаһын белеп ҡулланғанда, ул мускулдарҙы һығылмалы һәм көслөрәк итә. Әммә шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк, кофеин тәьҫиренә "йәш" мускулдар бирешеп бармай, шуға ла уны үҫеүсе организмға тәғәйенләү урынһыҙ. Оло йәштәге кеше өсөн иртәнге бер сынаяҡ ҡәһүә хәрәкәттә алыштырмаһа ла, мускулды тонуста тотоу өсөн яҡшы сара, ти ғалимдар. Мускулдарҙы нығытыу өсөн шпинат ҡулланырға ла була. Каролин институты (Стокгольм, Швеция) ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр буйынса, шпинатта нитрат бар. Ә нитрат аҙ күләмдә организм өсөн файҙалы, сөнки ул кальций алышыныуы менән бәйле ике типтағы аҡһым бүленеүен яҡшырта. Был аҡһымдар күберәк булған һайын, кальций күберәк сыға, ул үҙ сиратында мускулдарҙың тартылыуын көсәйтә.

■ Торт һәм башҡа тәм-том яратаһығыҙ, әммә уларҙы ашауҙы сикләйһегеҙме? Тель-Авив (Израиль) университеты ғалимдары билдәләүенсә, әгәр ҙә татлы ризыҡты иртән ашаһағыҙ, хатта ябығырға ла була. Уларҙың теорияһына ярашлы, юғары калориялы иртәнге аштан һуң көн дауамында тәм-томға тартылыу булмаясаҡ. Етмәһә, иртән метаболик процестар яҡшы эшләй, иртәнге аш ваҡытында уларҙы "ҡыҙҙырып" ебәрһәң, көнө буйы ҡабул ителгән ризыҡ яҡшыраҡ янасаҡ.

■ Ябай тоҙға ҡарағанда, таш һәм диңгеҙ тоҙо файҙалыраҡ һанала. Әммә Salt and Health компанияһы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тоҙҙоң был төрҙәренең химик составында айырма бөтөнләй юҡ. Волфсан превентив медицина институты табиптары фекеренсә, кулинарҙарҙың таш йәки диңгеҙ тоҙонда мөһим минераль матдәләр күберәк тигәне дөрөҫлөккә тап килмәй. Табиптар шулай уҡ бөгөн кешеләрҙең тоҙҙо кәрәгенән артыҡ ҡулланыуы тураһында ла белдерә. Тоҙҙоң көндәлек норманы - 1 балғалаҡ, әгәр ул ошо билдәнән ашып китһә, ҡан баҫымы күтәрелеү, инсульт ҡурҡынысы янай.

■ Кесаҙна -ололар өсөн дә, балаларға ла аҙнаның иң ауыр көнө иҫәпләнә. Шуға ла был көндә уларға артыҡ ауыр эш йөкмәтергә ярамай. Был турала Роспотребнадзор етәксеһе Геннадий Онищенко белдерә. Шуға ла мәктәп расписаниеһен төҙөгәндә был үҙенсәлек мотлаҡ иҫәпкә алынырға тейеш. Ул шулай уҡыусылар беренсе, иртәнге сменала уҡырға тейешлеген дә ата-әсәләрҙең хәтеренә төшөрә.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Бер уйлаһаң, кеше ғүмере оҙон-оҙаҡ һымаҡ, икенселәй уйлаһаң, ул - икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙҙәге бер тамсы ғына. Дөрөҫ ғилем алмау, баҡса-мәктәптәрҙә дин нигеҙҙәре уҡытылмау, атай-әсәйҙәрҙең, хатта олатай-өләсәйҙәрҙең дини ғилеме самалы булыу сәбәпле, беҙҙең аңға ошо уйҙырма һеңгән: йәнәһе, беҙ был донъяла күпмелер йәшәйбеҙ ҙә, үлгәс, сереп тупраҡ булабыҙ һәм - вәссәләм.**

# ФАНИ ҒҮМЕРЕБЕҘ...

## диңгеҙҙәге бер тамсы ғына



Шуға күрә күптәр, бигерәк тә быуыны нығынып етмәгән, етерлек аҡыл тупламаған, донъя күрмәгән йәш-елкенсәк үҙ алдына килеп баҫҡан проблеманан еңел генә "котолмаҡсы" - үҙен-үҙе үлтереп, көрсөктән сыҡмаҡсы була. Барыһы ла ошолай "еңел" генә булһа, үлемдән һуң йәшәү булмаһа, донъяның аҡыллы баштары күптән суицидты көрсөктән сығыуҙың иң оптималь юлы тип иғлан итер ине әле. Эш бының менән генә бөтмәй шул: үлгәндә йән биреү, ҡәберҙә фәрештәләргә яуап биреү, Ҡиәмәткәсә (ә уның ҡасан етерен Аллаһтан башҡа бер кем дә белмәй) ҡәберҙә ғазап сигеү (үҙ-үҙен үлтергән кешене ҡәберҙә даими ғазаптар көтә), Ҡиәмәт көнөндә ҡәберҙән ҡубарылыу, мәхшәр майҙанында Аллаh алдында яуап тотоу, ҡылғандарыңа бәрәбәр йә тамуҡлы (тәүбә), йә ожмахлы булыу көтә һәр бәндәне.

Тамуҡҡа эләгәсәк йәндәрҙең хәлен аңлатып тораһы ла түгел: Аллаһҡа ышанмаған, бәйғәмбәрҙәр һүҙенә ҡолаҡ һалмаған, Ҡөрьәндең бер аятын да уҡып, аңлап ҡарамаған, намаҙ ҡылмаған, ураҙа тотмаған, байлығынан ярлыларға зәкәт түләмәгән, изге эштәр ҡылмаған, ата-әсәһен рәнйеткән, кеше малына ҡул һуҙған, хәмер менән зинаны, отош уйындарҙы, процентҡа аҡса ашауҙы, донъя байлығын, кәйефсафаны яратҡандарҙың күрәһеләре бик хәтәр буласаҡ (бынан Аллаh үҙе һаҡлаһын!) Ошоларға өҫтәп, үҙенә-үҙе ҡул һалыуын да ҡушһаҡ, был кешеләргә ожмахтың ишек төбөн дә күреү юҡ. Мөхәммәт с.ғ.с. әйткән: "Һуҡ яраланған бер кеше, ауыртыуҙарға сыҙамай, үҙен-үҙе үлтерә, шул сакта Аллаh әйтә: "Минең ҡолом үҙ теләге менән минең алдыма сыҡты, йәғни ваҡиғаларҙы тиҙләтергә теләп, үҙенең ғүмерен ҡыйҙы, шуға күрә мин уға ожмахты тыйҙым, йәғни ул ожмахҡа инмәйәсәк", - ти .

Аллаh тыйғандарҙан тыйылмағандарҙы киләсәктә яза һәм ыҙа көтә. Бәй, шулай булғас, ниңә әҙәм балаһына Аллаh тарафынан бирелгән иң изге нәмәгә - йәнгә йәбешергә, үҙ ғүмерен үҙе ҡыйып, мәңге тамуҡлы булырға? Был донъялағы ғүмеребеҙ ҡыҫҡа ғына булһа ла, баҡый донъя бит мәңгелек. Беҙҙең был донъялағы ғүмеребеҙ баҡый донъялағы менән сағыштырғанда диңгеҙҙәге бер тамсы ғына. Иманлылар өсөн был донъя - тамуҡ, теге донъя - ожмах, ти дин. Был донъяла фәҡир булғандар, өләштәре аҙҙар теге донъяла бай буласаҡ, йәннәттең нигмәттәрен татып йәшәйәсәк. Был донъяла ҡафыр булып, Аллаһты, уның барлығын, берлеген инҡар итеп, кеше өләшөн ашап, зина ҡылып, урлыҡ менән булып, етемдәрҙе рәнйетеп, байлығынан зәкәт түләмәй мал һайып йөрөүселәрҙе тамуҡ ғазаптары, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ыҙа көтә. Шуға ла диндар ата-бабаларыбыҙ донъя малына ҡыҙмаған, ятып инер өйө, ейер ризығы, өҫтөнә бер ҡат кейеме булһа, киләсәген ҡайғыртҡан - ахирәтен уйлаған: намаҙ уҡыған, ураҙа тотҡан, етем-еһерҙе ҡараған, күберәк изге эштәр эшләп сауап алырға тырышҡан. Уйлап ҡараһаң, күпме генә бай булһаң да бер юлы ике машинаға ултырып йөрөмәйһең, ике диванда ятып йоҡламайһың, ике тун кейеп йөрөмәйһең, ашҡаҙанлыҡа тулһа, уның ситенә ашап булмай...

Аллаh беҙгә тәүлегенә 24 сәғәт биргән икән, ниңә намаҙға ярты сәғәт бүлмәҫкә? Мин үҙем эшләйем, үҙем ашайым, тип кәпәренә бәғзе берәү. Ә Аллаh ниңә ошо hау-сәләмәт тәнде, аҡылды, кейемде, ризыҡты бирмәһә, ни эшләр инең? Беҙ бөтәбеҙ ҙә Аллаһтың нигмәттәренән бушлай файҙаланабыҙ: һауаны һулайбыҙ, уны бер кем дә консерваға тултырып һатып бирмәй, һыуын эсәбеҙ (шөкөр, беҙҙә ул бушлай), еләк-емешен, үлән-бәшмәген йыябыҙ, һыу инәбеҙ, ерҙән йөрөйбөҙ. Быларҙы беҙгә кем биргән һуң? Ошо һәм башҡалар хаҡында донъя эштәренән, мәшәҡәттәренән саҡ ҡынаға булһа ла айырылып, уйланырға ваҡыт тапмайбыҙ.

Үҙ ҡолағым менән ишеткәнем бар. Намаҙлыҡта ултырырға тейешле әбейҙәр: "Эй, бармы икән ул теге донъя, унда кем барып ҡайтҡан? Намаҙҙы, ана, кемдең гонаһы күп, шулар уҡыһын, намаҙ уҡып, ураҙа тотмаһаҡ та, Аллаһы Тәғәлә бер еренә ҡуйыр әле", - тип кенә ебәрәләр, тәүбә, әстәғфируллаһ. Аллаһҡа ышанмаған, уның барлығына, Ҡиәмәт көнөнә ышанмаған, Ҡөрьән хөкөмдәрен инҡар иткән, хет башҡорттан, хет үзбәктән тыуһын, тәүбә итеп төҙәлмәһә, инде мосолман түгел. Иманлы кешегә Аллаһтың "ҡайҙа булһа ла ҡуйыуы" кәрәк түгел, иманлы кешегә фәҡәт ожмах кәрәк һәм ул уға ынтылып йәшәй!

Ғүмерҙе лә, йәнде лә Аллаh бирә. Аллаh биргәндә ҡыйырға беребеҙҙең дә хаҡы юҡ. Яман сиргә юлығыусылар, улар ауырыу ғазаптарына түҙә икән, үҙ үлеме менән үлһә, уларҙы теге донъяла ошо сабырлыҡ, сир ыҙаларына бәрәбәр рәхәттәр көтә. Һәр проблема, һәр сир, яҡындарҙың үлеме беҙгә һынау булараҡ ебәрелә. Сабыр итеп түҙһәң, әжер-сауабы ҙур, түҙемлегең етмәй икән - аҙағы үкенес.

Сер түгел, һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа суицид осраҡтары күбәйә. Бының төп сәбәбе - халыҡта тейешле дини ғилем юҡлыҡта. Шөкөр, мәсеттәр асыла, йәштәр иман юлына баҫа, әммә күпселек әле урам, ғаилә, телевизор, интернет тәрбиәһендә. Мәсеткә дәрес алырға йөрөүселәр ҙә бармаҡ менән һанарлыҡ. "Балаларымдың башына камил аҡыл, файҙалы ғилем бир, иман байлығынан айырма", -тип доға ҡылған ата-бабаларыбыҙ. Файҙалы ғилем тигәне ана шул дөрөҫ дин ғилеме инде. Был ялбарыуҙың ниндәй мәғәнәгә эйә булыуы тураһында онотмайыҡ - еребеҙҙә үҙенә -үҙе ҡул һалғандар кәмер, тамуҡлылар һаны артмаҫ.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

# УРАҘАҒА НИӘТ ҺӘМ ИФТАР ДОҒАЛАРЫ

### Сәхәр ашағандан һуң

Ҡояш ҡалҡырҙан ике сәғәт алда, сәхәр ашын ашағандан һуң, фарыз ураҙаны тотоу өсөн ошондай ниәт ҡылына:

*"Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим. Нәүәйтуән әсумә саумә шәһри рамаҙанә минәл-фәжри иләл-мәғ-риби халисәл-лил-ләһи тәғәлә. Аллаһу әкбәр".*

Мәғәнәһе: "Аллаһы Тәғәлә өсөн тип таң атҡандан башлап ҡояш байығанға тиклем ихласлыҡ менән ураҙа тоторға ниәтләнәм. Аллаh - Бөйөк".

### Ауыҙ асҡанда уҡый торған доға

*"Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим. Аллаһүммә ләкә сумтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризкикә әфтарту үә лисаүми ғадим мин шәһри рамаҙанә нәүәйту фәғ-фирли мә ҡаддәмту үә мә әххарту".*

Мәғәнәһе: "Эй, Раббым! Һинең ризалығың өсөн генә тип ураҙа тоттом, һиңә генә иман килтерҙем. Эштәремдә тик Үҙеңә генә тәүәккәлләйем, Һин биргән ризыҡ менән ауыҙ астым, иртән тағы ла ураҙаға инергә ниәт иттем. Эй, гонаһтарҙы ярлыҡаусы Аллаh, үткәндә эшләгән гонаһтарымды ла, эшләү ихтималы булһа, киләсәктәгеләрен дә ғәфү ит!"

КИНӘЙӘ

# МЕНДӘР МАМЫҒЫ

Зәйнулла ишан Рәсүлев өҫтөнән бер туҡтауһыҙ шикәйәт яҙа бер әҙәм. Ишанды төрмәгә ултырталар. Күпмелер ваҡыт үткәс, ялыусы әҙәм ауырый башлай. Ниндәй генә табиптарға күрһәтеп ҡараһалар ҙа, уның сиренә дауа табылмай. "Шиҡәйәттәрем өсөн бирелгән Хоҙай язаһылыр был" тигән уй башына килә ялыусының һәм ул Зәйнулла ишандан ғәфү үтенергә була.

- Мин һине ғәфү итәм, - ти Зәйнулла ишан. -Тик бер шартым бар...

- Бераү генәме? - тип ҡыуанып китә ялыусы әҙәм.

- Бераү генә. Өйөңдәге иң ҙур мендәреңде урамға алып сыҡ та, шуның мамығын урам буйлап һибеп таратып сыҡ...

Ялыусы Зәйнулла ишан әйткәнде тиҙ арала үтәй һалып, тағы уның янына килә.

- Бик тиҙ башҡарғанһың мин әйткәнде, - ти Зәйнулла ишан. - Ә хәҙер шундай уҡ еңеллек менән һибеп сыҡҡан мамығыңды йыйып ал.

- Уны нисек йыйып бөтөрмәк кәрәк! - тип ҡысҡырып уҡ ебәрә ялыусы. - Ялған һүҙҙе таратыуы ла еңел, - ти Зәйнулла ишан. - Ә бына уның күңелгә, яҙмышҡа уйылған эҙемтәләрен юйыуы бик ауыр...

Шуның кеүек, телең менән һөйләп, уйлағаныңды һәм фекерләгәнеңде башҡаларға аңлата алыуың - иң ҙур ниғмәттәрҙең береһе. Тел -ул бысаҡ миҫалындағы ҡорал кеүек. Бысаҡ менән яҡшы эштәр ҙә, насар еңәйәти эштәр ҙә башҡарырға мөмкин. Тән яраһы төҙәлһә лә, тел яраһы төҙәлмәй, тиҙәр халыҡта. Бигерәк тә беҙҙең заманда һаҡһыҙ эш итеүселәр күбәйҙе тел менән. Ҡайһы берәүҙәр, динһеҙлектәнме, тәрбиәһеҙлектәнме, башҡаларҙың кәмселектәрен эҙләп, күреп, уны хатта арттырыбыраҡ һөйләргә тартынмай, шундай ғәйбәт таратыуынан ләззәт таба хатта.

Кешегә ауыр һүҙ әйтеп рәнйетеү өсөн артыҡ көс түгеү кәрәкмәй. Әммә рәнйетелгән кешенән ғәфү үтенеү, күпме генә тырышыуға ҡарамаҫтан, һөҙөмтә бирмәүе мөмкин. Ғәйбәт һөйләү йәки кешеләрҙең етешһеҙлектәрен һөйләп йөрөү сусҡа ите ашау, араҡы эсеүҙән дә яманыраҡ. Аллаһы Тәғәләнең изге китабында ғәйбәт һөйләү һәм кешенең кәмселектәрен һөйләп ләззәтләнеү үлгән кешенең итен ашау менән сағыштырыла.

Көндәрҙән бер көндө Бәйғәмбәребеҙ (с.г.с.) вәғәз һөйләгәндә етди таушы менән былай ти: "Әй, теле менән генә иман килтереп, күңелдәрендә иманы булмағандар! Мосолмандарға зыян килтермәгеҙ, уларҙың кәмселектәрен эҙләмәгеҙ. Берәйһе мосолман ҡәрҙәшенең кәмселеген эҙләп йөрөһә, Аллаһ та ул бәндәнең кәмселеген эҙләр һәм ул ҡайҙа ғына ҡаса ла, уны табып, оятҡа ҡалдырыр".



Ғәйбәт- иң оло гонаһтарҙан һанала. Ғәйбәт һөйләгәнгә ҡарағанда өндәшмәй тороуың хәйерлерәк. Мендәр мамығы кеүек, ялған һүҙҙәрҙе унда бында туҙҙырма. Таратыуы еңел булһа ла, нисек кенә теләһәң дә, йыйып алыуы еңел булмаҫ.

**Бибинур ҒИЗЗӘТУЛЛИНА әҙерләне.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Прививкалар

**Бала табыу йортонда саҡта уҡ сабыйҙарға туберкулездан БЦЖ һәм В гепатитынан прививкалар яһайҙар. Әйҙәгеҙ, уларҙың кәрәклеген һәм файҙаһын асыҡлап ҡарайыҡ.**

Телəһә ниндәй медик һеҙгә прививкалар иммунитетты ни бары 5-7 йылға ғына тәьмин итә, ә В гепатиты бары тик ике юл менән генә - ҡан һәм енси юл аша күсә, тип аңлатыр. Табиптар балаларға ҡан биргәндә уларҙың В гепатитын йоҡтороуын инҡар итә, сөнки ҡан алдан ентекле тикшерелә. Шул уҡ ваҡытта В гепатитына ҡаршы генетик модификацияланған инъекция ҡулланыла (Наталья Йылмаз, "Прививки в роддоме. Забота о здоровье или угроза будущему"), ә был инде килер быуындарға ла хәүеф менән янай!

Прививканан өҙләгәү бик етди булыуы ихтимал, был, тәү сиратта, бауырҙы зарарлай һәм организмдың дөйөм интоксикацияһына һәм уның эҙемтәләренә килтерә. Ашҡаҙан-эсәк трактында, бөйәрҙәрҙә, тирелә проблемалар, аллергия башланыуы мөмкин һ.б. Былар барыһы ла йоҡоһоҙ төндәргә, неврозға килтерә һәм был балаға ғына түгел, ата-әсәләргә лә кире йоғонто яһай. Бер проблема үҙ артынан икенсеһен әйәртә, ләкин прививка эшләнмәгәндә быларҙың береһе лә күҙәтелмәҫ ине. Шул уҡ ваҡытта бер кем дә хәүефлерәк булған С гепатитынан прививка тәҡдим итмәй!

БЦЖ-ға килгәндә инде, фтизиатрҙар үҙҙәре үк уның туберкулездан һаҡламауын белдерә. Медицина фәндәре докторы, фтизиатрия (туберкулез) һәм пульмонология кафедраһы мөдире, профессор Борис Бородулин бына нимә ти: "Күп илдәрҙә БЦЖ вакцинаһынан баш тарттылар, сөнки ул туберкулездың үгеҙҙәрҙә була торған микробактерияларынан эшләнгән һәм кешеләрҙе был сирҙән һаҡламай, кешеләр туберкулездың икенсе төрө - кешеләрҙә була торғаны менән сирләй!"

Кемгә БЦЖ эшләйҙәр, улар туберкулез менән йышыраҡ ауырый. Сөнки үгеҙ микробактериялары менән тәьҫир иткәндән һуң тотош организмдың был сиргә ҡаршы тороу һәләте кәмей. Бында юғары квалификациялы табип-фтизиатр, медицина фәндәре кандидаты В.П. Сухановскийҙың фекерен килтереү урынлы булыр: "Минең балалар менән оҙаҡ йылдар эшләү тәжрибәм яңы тыуған сабыйҙарға БЦЖ прививкаһы яһауҙан баш тартырға кәрәклегенә тулыһынса инандырҙы. Яңы тыуған балаларға вакцинация эшләүҙән баш тартыу балалар ауырыуҙарын һәм үлемен кәметеү мәсьәләһен хәл итеүҙең төп асҡыстарының береһе булып тора..."

Манту реакцияһы тип организмда туберкулез инфекцияһы бармы, юҡмы икәнлеген асыҡлау пробаһы атала. Пробаға исем биргән Манту исемле ғалим үҙе, әгәр кешегә туберкулезға ҡаршы (БЦЖ) вакцинация эшләнгән икән, проба алыуҙың мәғәнәһе юҡ, сөнки реакция булаҫаҡ, тип белдергән.

Медицина фәндәре докторы Т.А. Кожевникова етәкселегендәге туберкулез диспансерҙарының берендә ентекле тикшеренеү үткәрәләр - уларҙың барыһында ла Мантуға реакция булһа ла, араларында туберкулез менән ауырыған бер генә бала ла булмай. Шул уҡ ваҡытта манту пробаһы үҙе үк төрлө кире эҙемтәләргә килтерә ("Манту и как от нее отказаться", "Европейский дом", 2007 г.).

Артабан балаларға АКДС прививкаһын яһайҙар. Ул бер юлы дүрт инфекция штаммын йөрөтә (быума йүтәл, дифтерия, һын ҡатыу, полиомиелит). Балаһына ошо прививка яһалған әсә - Елена Златкинаның һүҙҙәрен килтерәм (Наталья Йылмаз. "Ни өсөн беҙ балаларыбыҙға прививка яһатыуҙан баш тарттыҡ?"): "Ике йәшендә балаға АКДС вакцинацияһын эшләнеләр. Шунан һуң бала ике аҙна иланы, йоҡламаны ла, ашаманы ла тиерлек. Бер аҙҙан етди неврологик проблемалар асыҡлана башланы. Көндөҙ йоҡлап алғандан һуң улым йөнгә үтерлек итеп ҡысҡырып уяна һәм сәғәт ярым-ике сәғәт шулай ҡысҡыра ине. Артабан инде уның уйнап ултырған еренән ҡапыл шыңшый башлағанын, һуңынан иларға тотонғанын, ахыр сиктә, ҡолап, истерикаға бирелеүенә иғтибар итә башланыҡ. Прививка мәләнә тиклем бала матур ғына һөйләшһә, бер нисә айҙан һуң һөйләү һәләтен юғалтты, бары тик "атай", "әсәй" тигән һүҙҙәрҙе генә әйтте. Прививка эшләткәндән һуң ярты йыл үткәс, буйын үлсәп ҡараныҡ - бер ҙә үҫмәгән. Ә быға тиклем йәштәштәрен уҙып киткәйне. Һуңынан, бығаса бөтөнләй аллергия күҙәтелмәһә лә, бит алмаларында аллергик сабыртма сыға башланы. Эсәктәрендә проблемалар барлыҡҡа килде, ваҡыты-ваҡыты менән бер нисек тә туҡтатып булмаған эс китеүе башланды. Аҙаҡ инде услап-услап сәстәре ҡойолдо - шул саҡта ғына мин вакцинаға терегөмөш ҡушыуҙарын иҫемә төшөрҙөм".

(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Һеҙҙең тәнегеҙ: физик камиллыҡҡа өлгәшеү

**"Кемдең күнекмәләр эшләргә ваҡыты юҡ, ул эшһеҙлек өсөн һәр саҡ ваҡыт табыр" тигән бер аҡыллы кеше. Бына һеҙҙең тормошоғоҙҙо яңы көс һәм һут менән тултыра аласаҡ бер нисә физик күнегеү төрө:**

- Йүгереү, атлау йәки тауҙарға сәйәхәт.
- Йөҙөү, теннис, ауырлыҡтар менән күнекмә йәки аэробика.
- Тәбиғи шарттарҙа етеҙ аҙымдар менән йөрөү.
- Хәрби бералыштар, йога, тәрән тын алыу күнекмәләре.
- Роликлы конькиҙарҙа, роликлы таҡталарҙа йөрөү.
- Баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеү, марафонда ҡатнашыу, ҡаршылыҡтар аша йүгереү.
- Елкәнле спорт, акваланг менән йөҙөү йәки һыу саңғыларында йөрөү.
- Мини-триатлонда ҡатнашыу йәки юрғалап йүгереү.

Әгәр, физик камиллыҡҡа өлгәшергә тип етди ҡарар ҡабул итһәгеҙ, анығ оҙайлы һөҙөмтәне күреү өсөн тәртипле, һәр саҡ дәртле булырға, тырышлыҡ һалырға тейешһегеҙ. 30 көндән һуң тормошоғоҙ яңы төҫтәрҙә балҡый башлар, үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тойорһоғоҙ. Һеҙҙе эш көнөнән һуң диван үҙенә саҡырып тартып тормаясаҡ. Уның урынына тормошоғоҙҙоң сифатын яҡшыртырлыҡ башҡа шөғөлдәр эҙләй башлаясаҡһығыҙ. Һеҙҙе бер кем дә туҡтата алмаясаҡ.

**Һәр саҡ дәртле булыу өсөн бер нисә кәңәш:**

- Еңел күнекмәләрҙән башлағыҙ (көнөнә 15 минут) һәм нисек көсөгөҙ артыуы хаҡында уйлағыҙ.
- Ҡәнәғәтлеккә һәм ыңғай тормош ҡыуанысына көйләнеп алығыҙ.
- Үҙегеҙгә иптәшкә шундай уҡ физик камиллыҡҡа ынтылыусы кеше табығыҙ.
- Тойғоларығыҙҙың сафлығын юғалтмаҫ өсөн спорттың төрлө төрҙәрендә күнекмәләр эшләгеҙ.
- 5, 10 йылдан һуң өлгәшергә теләгән физик күнекмәләрҙең маҡсатын яҙығыҙ.
- Нимәгә өлгәшергә теләйһегеҙ, шуларҙы һүрәтләүсе картиналарҙы ыңғай дәртләндереүсе итеп ҡулланығыҙ.
- Ниндәй булырға теләүегеҙҙе күҙаллап, визуаллаштереү ысулын ҡулланығыҙ.
- Программаны үтәүҙе үҙегеҙҙең ғәҙәтегеҙ итеп алығыҙ. Көн һайын бер үк ваҡытта шөғөлләнергә тырышығыҙ.
- Һәр бер уңышығыҙҙы теркәп, әйтеп барығыҙ. Мең саҡрымлыҡ сәйәхәт беренсе аҙымдан башлана икәнен онотмағыҙ.
- Көндәлек уныштың һәр кескәй генә ҡаҙанышы яңы бейеклектәргә катапульта булып хеҙмәт итергә тейеш: ҙур маҡсаттар ҡуйығыҙ.

Физик күнегеүҙәр һеҙҙе үҙгәртәсәк. Улар һеҙгә көс өҫтәйәсәк һәм иғтибарығыҙҙы хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыуға туплаясаҡ. Оҙон ғүмерле, аҡыллы, бәхетле булыу өсөн аҙналағы 168 сәғәттең алты-ете сәғәтен генә физик күнегеүҙәргә бүлергә мөмкинме? Гумбольдт әйткәнсә: **"Ысын шатлыҡ мейенең әүҙемлегенән һәм тәндең көсөргәнешенән килә; был ике нәмә һәр саҡ ҡулға-ҡул тотоношоп йөрөй"**.

**Робин ШАРМА.**



## 23 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Сердце Марии". Сериал
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "ЖКХ"
16.15 "Хочу знать"
17.00 "Детектор лжи"
18.00 "Вечерние новости"
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дом образцового содержания". Сериал
22.30 "Русалим. В гости к Богу"
23.35 "На ночь глядя". Ток-шоу
00.30 "Мини-юбка. Короткая история"
01.25, 03.05 "Банзай, режиссер!" Пародийная комедия
03.00 Новости
03.30 "Акулы атакуют"
04.25 "Хочу знать!" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 91-я серия
15.45 "Кровинушка", 116-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
